ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 ноябрь (ҡырпағай) 2018

№45 (827)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тыйылған - татлы, тиһәләр ҙә...**
тәмәке төтөнө әсе шул



3

**Был спорт төрөндә...**
ҡатын-ҡыҙға урын юҡ



6

**Үҙаллылыкты беҙгә бирмәгәндәр,**
үҙаллылыкты беҙ яулап алғанбыҙ!



8-9

**Онотола яҙған йоланы...**
тергеҙеү юлындабыҙ



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле дауам итә. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бөтөн донъя йәштәр көнө байрамы алдынан күптән түгел ойошторолоуына 100 йыллыкты билдәләгән комсомол тураһында һөйләшеп алайыҡ әле?

***Хәләф ИШМОРАТОВ, 1982-1990 йылдарҙа комсомолдың Баймаҡ райкомы, унан Башҡортостан өлкә комитеты секретары, 1995-2005 йылдарҙа Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, тарих фәндәре кандидаты, С.Юлаев ордены кавалеры:*** Комсомол минең өсөн оло тормош мәктәбе булды. Был ойошманың бер быуатлыҡ тарихы булыуы үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй. Уның барлыҡҡа килеү тарихына күҙ һалһаң, комсомол властар алышыныуҙан өмөтһөҙләккә, икеләнеүҙәргә бирелгән йәш быуын вәкилдәрен яңы тормош төҙөшөүгә күтәреүсе, рухландырыусы ойошма булды. Ул киң халыҡ массаларына был донъяла ғәҙеллектең барлығын, уны яулап алыу кәрәклеген, шәхси, үҙ мәнфәғәттәреңде ҡайғыртып йәшәүгә ҡарағанда, дөйөм халыҡ эше - яңы тормош төҙөү өсөн көрәшергә кәрәклеген аңлатты, наҙанлыҡты бөтөрөүҙә ҡатнашты, яңы ҡалалар төҙөнө, сиҙәм ерҙәрҙе күтәрҙе, тимер юлдар һалды... Комсомол башҡарған эштәрҙең барыһын да һанап та бөтөрлөк түгел. Бер һүҙ менән әйткәндә, һәр эштә башлап барыусылар булды комсомол ағзалары. Комсомол сафындағыларҙың илһөйәрлек сифаттары, үҙ принциптарына тоғролоғо айырыуса Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында асыҡ сағылды: "Йәш гвардия"сылар, Зоя Космодемьянская, Виктор Талалихин, Шакирйән Мөхәмәтйәновтар исемен генә телгә алыуҙа етә. Йәш күңелдәргә комсомол мәктәбе күндергән иң ҡиммәтле рухи хазиналарҙың береһе - ул илһөйәрлек сифаты ине. Бөгөн йәштәргә ана шул һабаҡ етешмәй, минеңсә. Икенсенән, ул бына тигән лидерҙар мәктәбе лә булды. Был да бөгөнгө йәштәр быуынын нығытырға тейешле сифат. Ил Президенты В.Путин да бит бөгөн беренсе урынға бына ошо сифаттарҙы ҡуя, ләкин, үкенескә, беҙҙә әле комсомолды алыштырырҙай ойошма юҡ. Элекке комсомол ағзаларының бөгөн дә әле әүҙем тормош алып барыусы, эшләп йөрөүсе быуын вәкилдәре пенсияға сығып китеп бөтһә, ил яҙмышы кем ҡулына ҡалыр, тип тә уйлап ҡуйыла, сөнки бөгөн йәштәрҙең күпселеге көс түкмәй генә, эшләмәй генә күп аҡса алыу тураһында хыялланып йәшәй. Йәл, әлбиттә. Үҙ эштәренә мөкиббән киткән эскерһеҙ, тырыш хеҙмәтсәндәр тап комсомол мәктәбендә сыныҡҡан кешеләр ине лә ул. Йәштәр араһында волонтерҙар хәрәкәтен күтәреп ебәрергә тырышыуҙар бар, әлбиттә. Үҙенә күрә, яҡшы яҡтары бик күп булһа ла, был ойошма барыбер комсомолды алыштыра алмаясаҡ, сөнки ул ниндәйҙер ваҡытлыса кампанияға ҡоролған бурыстарҙы үҙ эсенә ала һәм вәкәләттәре лә сикләнгән. Ә бит комсомол тотош бер системаға һалынған, ләкин бер ҙә ҡатып ҡалмаған, тормошсан йәшәү рәүеше ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!*

# ИСЕМ ҺАЙЛАУ...

## яуаплы ғәмәл

**Һуңғы осор "Өфө" Халыҡ-ара аэропортына исем ҡушыуға арналған хәбәр баҫма матбуғатта, радио, телевидение аша бер нисә тапҡыр халыҡҡа еткерелде. Ошо хаҡта үҙемдең фекерҙәремде белдергем килә.**

"Өфө" аэропорты илдең иң ҙур һәм ҡеүәтле аэропорттарының береһе. 80 йыллыҡ тарихы булған аэропорт урындағы линияларҙы ла хеҙмәтләндерә торғайны, иҫегеҙҙә булһа, Белоретка, Сибайға, Баймаҡҡа, шулай уҡ ҡайһы бер райондарға самолеттар оса торғайны. Бөгөнгө аэропортты ул замандағыһы менән сағыштырып та булмай. Сит төбәктәр уны милли авиакомпания итеп тә таныған мәлдәр бар ине. Бөгөн ул халыҡ-ара кимәлдә хеҙмәттәшлек итә.

Был аэропорт һәр кемебеҙ өсөн яҡын, республикабыҙҙың ғорурлығы ул. Шуға ла Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы иғлан иткән бәйгелә әүҙем ҡатнашайыҡ. Улар "Рәсәйҙең бөйөк исемдәре" проекты сиктәрендә илдең 45 аэропортына билдәле шәхестәрҙең исемен бирергә тәҡдим итә. Был исемлектә "Өфө" аэропорты ла бар. Бөгөнгө көндә икенсе турға үткән шәхестәр араһына, минеңсә, осраҡлы килеп эләккәндәр ҙә бар. Шаляпин ижад юлын Өфөлә башлаһа ла, аҙаҡтан илен ҡалдырып киткән. Нуриев тураһында ла шуны уҡ әйтергә була. Илебеҙ уларҙы үҫтергән, ижад итергә шарттар тыуҙырған, ә улар икенсе ҡәҙерле ер тапҡан. Довлатов та сит илдә танылыу яулай. Был исемлектә һәр беребеҙ өсөн иң ҡәҙерле исем бар, ул - Салауат Юлаев. Салауат - милләтебеҙ өсөн рухи бағана. Ә М. Шайморатов, М. Кәрим, М. Гәрәев халҡыбыҙҙың данын яҡлаусылар. Уларҙың исеме аэропортҡа осоп килгән, сит ҡитғаларға осҡан самолеттарҙа мәңгеләштерелһен.




М. Шайморатовҡа, нисек кенә тырышһаҡ та, герой исеме бирҙерә алмайбыҙ, исмаһам, самолет аша донъя уны белһен. С. Аксаков Башҡортостанда ҙур эҙ ҡалдырған шәхес. Шул уҡ кимәлдә М. Нестеров та бар, улар тиң шәхестәр.

Һәр хәлдә, уйлашайыҡ әле, тимәксемен. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар менән эшләйәсәк ирекмәндәрҙең тейешле белеме, әҙерлеге булыр, моғайын. Улар матбуғат биттәренә лә күҙ һалып, халыҡ фекеренә ҡушылып, уны хуплар, тип ышанам.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

12+

✓ **Быдай тәрбиә мәктәбе юкка сығырға тейеш түгел ине - был ҙур хата булды. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙгәртеп ҡороу осоро кәрәк тә булғандыр, ләкин ул комсомолға, тимәк, йәштәргә юлды ябырға тейеш түгел ине.**



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

**"Киске Өфө" гәзитенең тематик төрлөлөгө уның уҡыусылары даирәһенең дә киң булыуын күрһәтеп тора. Ә шулай ҙа, үҙем күп йылдар мәғариф өлкәһендә эшләгәнлектән, был тап уҡытыусылар өсөн дә тәғәйенләнгән баҫма ул, тип әйтә алам.**

# ГӘЗИТ УҠЫМАҒАН...

## уҡытыусы буламы?

Һүҙ ҙә юҡ, уны иң элек туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары даими уҡып барырға тейеш булһа, "Киске Өфө" шул уҡ ваҡытта тарих, география, биология, физкультура, хеҙмәт дәрестәрен алып барыусылар өсөн дә бик файҙалы өҫтәмә ҡулланма булыр ине, сөнки уның биттәрендә Башҡортостаныбыҙ тарихынан алып, ауыҙ-тел ижады хазиналарын өйрәнеү, әсә телебеҙҙе уҡытыу мәсьәләләре генә түгел, тауҙарыбыҙ, ер-һыуҙарыбыҙ, уның байлыҡтары, тарихтары, атамалары этимологияһы, шифалы үҫемлектәр донъяһы, спорт хаҡында ла уҡымлы мәҡәләләр донъя күреп тора. Бер һүҙ менән әйткәндә, рухи донъябыҙҙы байытыусы бер сығанаҡ ул "Киске Өфө". Шул уҡ ваҡытта минә мөхәрририәттең уҡыусылар, йәштәр менән даими бәйләнештә булыуы ла оҡшай. Бөгөн йәштәр өсөн серҙәш, дуҫ, кәңәшсе ролен, юғиһә, интернет алыштырҙы бит, ә унда йәш быуындың үҙ илен, халҡын, әсәһе телен һөйгән кеше булып үҫеүе өсөн ҡыҙыҡһындырыу тигән нәмә юҡ, киреһенсә, уларҙа юлдан яҙҙырыу кеүек саралар йәйелеп итеү өҫтөнлөк алған.

Әйткәндәй, класс етәкселәре өсөн дә башҡа бер сығанаҡтан да эҙләп табып булмай торған ҡулланма ул "Киске Өфө". Тик бына көнө-төнө интернетта ултырған уҡыусы балалар был гәзит хаҡында ҡайҙан белергә тейеш? Ғаиләһендә ата-әсәһе алдырып уҡыһа, шәп тә бит, ләкин ҡала йорттарының подъезд майҙансыҡтарындағы почта йәшниктәре эргәһенән үткән һайын шул тирәлә туҙырап ятҡан реклама ҡағыҙҙарынан башҡа гәзит күргән юҡ. Уҡытыусыларҙың үҙҙәренән дә хатта, гәзит уҡырға ваҡыт юҡ, тигән зарланыуҙарҙы йыш ишетергә тура килә. Гәзит уҡымаған уҡытыусы - балаларға белем биреүселәрҙең бөгөнгө йөҙөн асыусы бер сифат, күрәһең. Һис булмаһа, мәктәп директоры китапханаға, уҡытыусылар бүлмәһенә бер нисә дана гәзит яҙҙыра алыр ине, буғай. Гәзит алдырмайһың ни, тигән һорауға хәҙер: "Мин уны электрон вариантта уҡыйым,"- тип кенә яуаплай күптәребеҙ. Бер яҡтан, был гәзиткә яҙылмаған кешенең аҡланыуы булып та яңғырай түгелме? Электрон формат та яҡшы, әлбиттә, ләкин ҡулында гәзит булһа, уны уҡыр өсөн махсус сайтҡа инеп ултырыу ҙа кәрәкмәйәсәк. Унан, ҡағыҙ гәзитте класс сәғәттәрендә файҙаланыу ҙа уңайлыраҡ, минеңсә. "Заман башҡорто", "Өфө башҡорто" кеүек рубрикаларҙа башҡорт ғаиләһендә, әсә телендә уҡып белем алған билдәле һөнәр һәм талант эйәләре, спортсылар менән ҡыҙыҡлы әңгәмәләр йыш бирелә. Уҡыусыларға һөнәр һайлауҙа бындай материалдарҙың йоғонтоһо ҙур, тип уйлайым. Форсаттан файҙаланып, ҡайһы бер тәкдимдәремде лә еткермәксемен. Теге йәки был өлкәлә гәзит уҡыусы үҙ белемен һынап ҡараһын өсөн һәр төрлө викториналар, конкурстар ойоштороу, башваткыстарҙы төрләндереберәк биреү, тормош-көнкүрештә, сәләмәтлеккә һаҡлауҙа файҙаланырлыҡ кәңәштәр йышыраҡ баҫылһын ине, тигән теләктәмен.

**Гөлсәсәк ҒӘЗИЗУЛЛИНА,**
**Өфөләге М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейының башҡорт теле уҡытыусыһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтөн донъя йәштәр көнө байрамы алдынан куптән түгел ойошторолоуына 100 йыллыкты билдәләгән комсомол тураһында һөйләшеп алайыҡ әле?




(Башы 1-се биттә).

***Рәшиҙә СОЛТАНОВА, БР Ҡатын-ҡыҙҙар берлеге башҡарма комитеты рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Совет осоро хаҡында ниндәй кире фекерҙәр әйтелмәһен, уларҙың күбеһе комсомолға ҡағылмайҙыр, тигән фекерҙәмен, сөнки йәштәр ойошмаһы күпкә тормошсан, бюрократияға бирелмәгән, берҙәм энтузиастарҙан тора ине. Комсомол беҙҙе эшкә, ил мәнфәғәттәре менән йәшәргә өйрәтте. Дөрөҫ, үҙгәртеп ҡороу осоронан һуңғы уңайлы шарттарҙан файҙаланып, дәүләт милкен айырым ҡулдарға таратып алыу башланғас, Абрамович, Ходорковский кеүек олигархтарҙың ҡасандыр комсомол органдарында эшләүен иҫкә төшөрҙәләр һәм шуны хәҙергә тиклем ошо ойошмаһы быҫратыу, уның йөҙөнә ҡара ягыу өсөн файҙаланалар. Үкенескә, ундай карьеристар комсомол сафында ғына түгел, бөтөн урындарҙа ла бар, әле лә күп ундайҙар. Ләкин бындай яла күпселектең йөҙөнә ҡара була алмай, сөнки комсомол мәктәбен үткән миллионлаған намыҫлы йәштәрҙән үҙ һөнәрҙәренә бирелгән, ил мәнфәғәте өсөн көс түккән кешеләр, етәкселәр үҫеп сыҡҡанын яҡшы беләбеҙ. Шул уҡ бөгөнгө ил етәкселәре: Владимир Путин да, Дмитрий Медведев та, Валентина Матвиенко ла, Вячеслав Володин да, депутаттарҙың да күбеһе ваҡытында комсомол тәрбиәһе алған кешеләр.

Әйткәндәй, 27 октябрҙә Мәскәүҙә, Кремлдә, ВЛКСМ-дың 100 йыллығына арналған Бөтә Союз байрамында ҡатнашып ҡайтыу бәхете тейҙе. Комсомолдың даны кеүек үк, уның бер быуатлыҡ тарих тантанаһы ла легендаға тиң сара булды. Элекке комсомол секретарҙары ла, ябай комсомолдан алып билдәле һөнәр эйәләре: хеҙмәт геройҙары, ғалимдар, космонавтар, яҙыусылар, артистар һәм башҡа билдәле шәхестәребеҙҙе күреп, улар менән аралашыу онотолмаҫ тәьҫораттар бүләк итте. Ә беҙҙең йәшлек йырҙары һуң! Комсомол йырҙарынан төҙөлгән гөлләмәне Турецкий хорына ҡушылып, бөтөн зал аяғүрә баҫып йырланы. Ул йылдарҙың даны һүнмәҫ.

Мин үҙем дә 10 йыл ғүмеремде комсомол эшенә бағышланым. Был йылдар тәжрибәһе минә артабанғы хеҙмәт юлымда ҙур ярҙам булды: яуаплылыҡ тойғоһо; ерене еткереп эшләү, юғарынан күрһәтмәләр көтөп ултырмайынса урындағы башланғыстарға юл асыу; кешеләр менән кешесә мөғәмәлә һәм башҡа шундай эш һәм кешелек сифаттары тәрбиәләй ине комсомол. Бындай тәрбиә мәктәбе юкҡа сығырға тейеш түгел ине - был ҙур хата булды. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙгәртеп ҡороу осоро кәрәк тә булғандыр, ләкин ул комсомолға, тимәк, йәштәргә юлды ябырға тейеш түгел ине. Хаталарҙан бер кем дә азат түгел, ләкин комсомол уларҙан арынырға, эшен артабан камиллаштырырға әҙер һәм асыҡ ине; был уға бюрократлашҡан партия системаһына ҡарағанда еңелерәк биреләсәк ине. Тик уға үҙгәрергә ваҡыт ҡына бирелмәне...

***Фәниә МОТАҺАРОВА, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөнгөләй хәтеремдә: беҙҙең класты тиҙҙән комсомолға алалар, тигәндә ишеткәс, йоҡомдан яҙҙым. Алмай ҡуймаҫтармы - ояты ни торор... Улай тиһәң, алама гәзәттәрем юҡ - тфү-тфү. Ауылдан килеп, интернатта уҡып йөрөгән балала ниндәй боҙоҡлоҡ булыуы мөмкин! Хатта иң үткер, шаян ҡыҙҙарҙың да ул замандарҙа комсомолға алмаҫлыҡ гәйебен хәтерләй алмайым бөгөн. Тәртипле булдыҡ, һүҙ ҙә юҡ. Бөгөнгө ҡыҙҙар кеүек, бала йәшенән дә сығып етмәҫтән егеттәр менән типтереү, тәмәке тартыу, һыра һемереү, оятһыҙ итеп һүгенеү, ярым-яланғас йөрөү кеүек ҡылыҡтар бөтөнләй юҡ ине беҙҙә. Ҙур ҡалаларҙа булһа, булғандыр (үткән быуаттың 70-се йылдары ине), ләкин район үҙәгендәге интернат-мәктәп - өлгөлө тәрбиә үҙәге булды. Бына беҙ райком бинаһында. Берәмләп саҡырталар, өҫтәл артында теҙелеп ултырған ағай-апайҙар комсомол ойошмаһына, уҡыуыңа ҡағылышлы һорауҙар бирәләр. Тәүге тормош имтиханы, үҙ тәртибең өсөн үҙеңә яуаплылыҡ алыу көнө булғандыр был. Ысынлап та, был уҡыусы тормошонда едти аҙым тип ҡарала ине ул саҡ, сөнки комсомол - һәр яҡлап башҡаларға өлгө булырға, яҡшы уҡырға, үҙеңә ҡушылған йомоштарға яуаплы ҡарарға һәм уны үтәргә тейеш, тигән бурыс ҡуйылһа, икенсе яҡтан, комсомол - партия ярҙамсыһы, йәш коммунизм төҙөүсе, тип ҡанға һеңдерергә тырышалар ине. Ләкин, дөрөҫөн әйткәндә, бер саҡ ул коммунизмдың килеренә бер кем дә ышанманы, тик был турала ҡысҡырып әйтеүсе генә юҡ ине. Шулай итеп, комсомол булыуҙың тәүге өлөшө үтәлерлек ябай бурыстарҙан торһа ла, икенсе өлөшө ниндәйҙер әкиәт, фантазия булыуы менән үҫмер психологияһын, уның эске гармонияһын боҙоусы, ике йөҙлөлөккә этәреүсе бер фактор булып торҙо. Уҡыу һәм тәртибемә һүҙ тейҙермәгән хәлдә лә, комсомол тормошонда һәлкәү, ихласһыҙ булыуымдың сәбәбе шунда булғандыр, күрәһең. Хәйер, ундай уйҙырмаларға, икейөҙләләнеүҙәргә һәр хәрәкәттә, фирҡәлә урын булалыр инде ул, тип уйлайым хәҙер...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республикала муниципалитеттарҙы үҫтереүгә арналған семинар-кәңәшмә булып үтте. "Беҙ кешеләрҙең партнёрҙары булырға тейешбеҙ. Беҙ халыҡҡа асыҡ булырға һәм уларҙы ишетергә тейешбеҙ. Үҙемдең эшемдә һеҙгә таянам. Көслө етәкселәр - көслө республика. Шуға күрә өҫтөнлөктәребеҙ бер төрлө булһын ине. Беҙҙең осрашыуыбыҙ - ул бер-беребеҙҙе аңлауға һәм берлектә һөҙөмтәле эш башҡарыуға ынтылыш", - тине Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, семинар-кәңәшмәне асып.

✓ Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә дарыуҙар һәм медицина ҡорамалдары менән тейешенсә тәьмин итмәү темаһы ҡүтәрелде. Республика һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рафаэль Яппаров һатып алыуҙар өлкәһендә тәжрибәле белгестәрҙең юҡлығын, йөкләмәнең ҙур булыуы сәбәпле кадрҙарҙың, дәүләт ҡазна учреждениеһы етәкселегенең йыш алмашыныуын ошо өлкәләге төп проблемалар тип атаны.

✓ Өсөнсө "Беҙҙең бренд" аҙыҡ-түлек фестивале 14-17 ноябрҙә Өфөлә үтә, тип хәбәр итте республиканың Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте. Фестивалдә Өфөнән һәм Рәсәй төбәктәренән 100-ҙән ашыу компанияның ҡатнашыуы көтөлә. Улар иң яҡшы аҙыҡ-түлек һәм эсемлек өлгөләре, өряңы ҡаҙаныштар һәм технологиялар менән таныштыра. Күргәҙмәлә "Беҙҙең бренд" аҙыҡ-түлектән ауыҙ итеү конкурсы һәм Рәсәй бариста чемпионатының Волга буйы төбәгендә һайлап алыу этабы була.

✓ 30 ноябрҙән Башҡортостанда Өфө - Яңы Абҙаҡ маршруты буйынса йөрөгән "Урал легендаһы" поезының хәрәкәте тергеҙелә. Туристар араһында популяр был ҡышҡы маршрут буйынса хәрәкәт кәмендә 1 апрелгә тиклем дауам итә, тип ҡуҙаллана. Ошондай "тау" маршрутына ихтыяж башҡа йыл миҙгелдәрендә лә булһа, "Урал легендаһы" поезы хәрәкәте яҙғы-йәйге осорҙа ла дауам итәсәк.

✓ "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы D категориялы водителдәр һәм кондукторҙар йыйыу тураһында иғлан итте. Тәүгеләренә - 40 мең һумға, контролерҙарға 25 мең һумға тиклем эш хаҡы вәғәҙәләйҙәр. 8 (347) 262-50-50; 8-937-490-23-24; 8 (347) 284-87-27; 8-917-806-70-23; 8 (347) 223-04-55; 8-905-358-82-21 телефондары буйынса шылтыратырға кәрәк.

✓ *Әгәр дәүләт кеше һаулығы хаҡында ҡайғырта икән, ысынлап та ул "үгеҙҙе мөгөҙөнән" алырға тейештер, йәғни шәхсән тәмәкесенең үҙе менән ныҡлап профилактик эш башлау. Ә ниңә уларҙы ла иҫәпкә ҡуймаҫҡа?*



*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Был яҡтан уңдым: атайым да, ирем дә тәмәке тартманылар. Уның ҡарауы, эргә-тирәләге паровоз кеүек борлатыусы әҙәмдәрҙең алама ҡылығы ғүмер буйы теңкәне ҡорота: күршеләр булһынмы ул, башҡа туғандар йә хеҙмәттәштәрме... Хатта туҡталышта транспорт көткәндә йә урамда янындан үтеп киткән арала ла һине ағыулап өлгөрә бит улар. Автобусына инеп ултырһаң да әле, ҡотолдом, тимә: салонда бала-саға, өлкәндәр ултырыуға ла ҡарамай, водитель борҡота башлай.**



# ТЫЙЫЛҒАН - ТАТЛЫ, ТИҺӘЛӘР ҘӘ...

## тәмәке төтөнө әсе шул

Уйлап ҡараһаң, бындай осраҡта бит тәмәкесе эгоистың да эгоисы, үҙ ҡәнәғәтлеген ҡайғыртып, нәфсеһен ҡандырыу өсөн генә лә күпме кешене үҙенең һаҫығын һуларға мәжбүр итә. Уйлап ҡараһаң, ысынлап та, ниңә әле мин, бер ни булмағандай, шуның менән килешеп йәшәргә, үҙ мәнфәғәттәремә күрәләтә аяҡ һөртөүҙәренә түҙеп торорға тейешмен? Күптәрҙең өндәшмәүе лә ғәжәп түгел: улар, күрәһең, төтөн эсендә йәшәп, шуға күнеккән кешеләр. Тимәк, ғаиләләрендә тәмәкеселәр бар, шуға ла улар төтөн еҫен һиҙмәй, һиҙһә лә, иҫтәре китмәй. Медицина теле менән әйткәндә, улар ҙа минең кеүек үк "пассив" тартыусылар һәм улар тартыусының үҙенә ҡарағанда ла нығыраҡ ағыулана. Был да рәсми медицина биргән мәғлүмәт.

Дөрөҫ, йәмәғәт урындарында хәҙер тартҡан кешене тәртипкә саҡырыуы әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырмай: иҫкәртеү менән улар шундуҡ тәмәкеләрен һүндерә һала. Ә бына көнкүрештә, йәғни күп фатирлы йорттарҙа улар үҙ нәфселәренә тулы ирек ҡуя, бында һин уға һүҙ әйтеп ҡара! Өйөндә йә лоджияһында тартамы, баҫҡыс майҙансығына сығамы - уның шойҡаны кисекмәҫтән икенсе фатирҙарға тарала: баш ауырта, уҡшыта башлай, ләкин бер ни ҡылыр сара юҡ. "Мин үҙ өйөмдә, теләһәм, көнө буйы ла тартам!" тип кенә ҡуя ул. Баҫҡыс майҙансыҡтары стеналарындағы "Тартыу тыйыла" тигән махсус билдәләргә лә төкөрөп бирә тәмәкесе. Әйткәндәй, уларҙың тағы бер яман ғәҙәте бар: тартҡан төпсөктәрен һүндереп, махсус һауытҡа һалыу урынына тәҙрәнән генә ырғыта улар. Ниндәйен дә боҙоҡ, тәртипһеҙ булыуҙарын раҫлаусы тағы бер дәлил бит был. Шундай төпсөктәрҙең яңылыш аҫҡы ҡат балконына төшөп, йә булмаһа, көйрәтеп ятҡанында йоҡлап китеп, күпме янғын сыҡҡаны булды! Әммә ләкин бер генә тәмәкесене лә хөкөм иткәндәре йә штраф һалғандары юҡ әле. Өгөт-нәсихәт, листовкалар менән хәҙер кешене тәрбиәләү мөмкин түгеллегенә төшөнөргә күптән ваҡыт бит инде.

Һуңғы ваҡыт, әйткәндәй, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан тәмәке тартыуға ҡаршы 2017-2022 йылдарға һәм унан һуңғы ваҡытҡа эшләнгән концепция сиктәрендә байтаҡ ҡына ҡәтғи саралар тәҡдим ителә былай. Дөрөҫ, улар араһында бынан алда уҡ иғлан ителеп тә, ошоға тиклем бер ниндәй һөҙөмтә бирә алмағандары ла бар. Мәҫәлән, кинофильмдарҙа тәмәке тартыу эпизодтарын тыйыуҙы сәнғәт өлкәһе бигүк ҡабул итеп бөтмәгәйне. Һөҙөмтәлә, кинофильмдар, сериалдар тормошта нисек бар - шундай күренештәр менән донъя күрә тора. Бер яҡтан, был аңлашыла ла: билдәле режиссер, "Мосфильм"дың генераль директоры Карен Шахназаров әйтмешләй, тәмәкеһеҙ фильмдар сығарып ҡына был насар ғәҙәттән ҡотолоу теләге бер ҡатлылыҡ булыр ине. Шуға күрә, был йәһәттән насар ғәҙәткә бирелгән кешеләргә туранан-тура уларҙың мәнфәғәттәренә ҡағылышлы яза сараһы биреү һөҙөмтәлерәк булмаҫ инеме, тигән һорау тыуа. Таныш бер ҡатындың, ирем көнөнә ике ҡап тәмәке тартып бөтөрә, тип зарланыуы иҫтә ҡалған. Транспортҡа түләү өсөн бирелгән аҡсаһын да тәмәке йә һыраға тотоноп, бер талай йәйәү генә йөрөп тә алғылай икән был ир. Шуға күрә, тәмәкегә хаҡ арттырыу, штраф һалыу кеүек сараларҙың иң тәүҙә ғаилә кеҫәһенә һуғасағын күрмәмешкә һалышыу ҙа ярамайҙыр. Ҡайһы бер Европа илдәрендә ҡулланылған тағы бер сараға көн ҡаламы? Бында иһә һүҙ тәмәке ҡабы тышын сағыу буяуҙар менән биҙәмәйенсә, исеме-маркаһын ваҡ хәрефтәр менән яҙып сығарыу хаҡында бара. Үкенескә, был юлдың да үҙенә күрә әтнәкәләре бар: уның өсөн ваҡыт кәрәк, сөнки был Евразия иҡтисади берләшмәһе закондарына үҙгәреш индереү процедураһын үтергә тейеш була, ти министр Скворцова.

"Тәмәке тартыу тыйыла!" тигән билдәне йә яҙыуҙы беҙгә төрлө урындарҙа күрергә тура килә, тик тап шул урында иҫе лә китмәйенсә, төтөн борлатып тороусыға шелтә әйткән йә штраф һалғандар юҡ. Әлеге концепцияға индерелгән ошо һәм башҡа ҡайһы бер сараларҙы етерлек кимәлдә эшләй тип әйтеүе ҡыйын шуға ла. Бер ярайһы ғына һөҙөмтәле булмаҡсы тәҡдим шулай ҙа эшлекле тойолғандай ине тәү ҡарашҡа: Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығы тәмәкегә экологик һалым мәсьәләһен күтәрҙе. Был закон проекты авторҙары уйынса, экологик һалым - тирә-яҡ мөхиткә килтерелгән зыян өсөн ғәмәлдә булған түләүҙәрҙе алыштырасаҡ. Ошоға тиклем бындай һалым предприятиеларға һалына торған булһа, хәҙер ул физик шәхестәргә ҡарата ла ҡулланыласаҡ, ти улар. Тәмәке тартыусыларҙың барыһы бергә атмосфераға йылына 500 мең тонна углерод оксиды, 720 мең тонна синиль кислотаһы, 108 мең тонна никотин, 384 мең тонна аммиак бүлеп сығара. Ә тәмәке төтөнөндә, мәғлүм булауынса, 4 660 төр элемент, шул иҫәптән, полоний менән фенол бар. Быларҙың барыһын 1,1 млрд һандағы тәмәкесегә бүлеп, уларҙың һәр береһенең экологияны бысратыуға индергән "өлөшөн" иҫәпләп сығарырға була - 1,55 тонна! Ошо һандарҙан сығып, экологияны бысратҡан өсөн һалым суммаһын иҫәпләп сығарыуы ла ҡыйын түгел, тик бына, ҡыҙғаныҫҡа, һалым хеҙмәттәре кемдең тартыу-тартмауын тикшерә алмай, шунлыҡтан, ҡулланыусы өсөн һалымды етештереүсегә түләргә тура киләсәк, ти проект авторҙары. Ә шулай ҙа тәмәкесегә барыбер үҙе йә ғаиләһе кеҫәһенән күпмелер сумма сығарырға тура киләсәк, сөнки етештереүсе һалымды үҙ кеҫәһенән түләмәйәсәк бит.

Әбына тәмәкегә хаҡты арттырыу уны әллә ни борсомай: барыбер тарталар, барыбер һатып алалар. Шулай итеп, әлеге лә баяғы мәсьәләнең эргә-тирәһендә уранғылап йөрөүҙән ары китмәй эш. Минеңсә, әгәр дәүләт кеше һаулығы хаҡында ҡайғырта икән, ысынлап та ул "үгеҙҙе мөгөҙөнән" алырға тейештер, йәғни шәхсән тәмәкесенең үҙе менән ныҡлап профилактик эш башлау. Ә ниңә уларҙы ла иҫәпкә ҡуймаҫҡа? Йәшәгән урындары буйынса поликлиника йә наркология үҙәктәре аша эш итергә булалыр, моғайын. Ләкин был берәүгә лә кәрәкмәй, сөнки хаҡ арттырыу, йә булмаһа, һалым сәпәү дәүләт өсөн отошлораҡ: мәшәҡәт тә юҡ, аҡса ла тама. Хәҙер бит ябай халыҡты тауыҡ урынына йолҡҡоларға форсат артҡандан-арта бара: һәр мөйөштә һалым менән штраф һағалай. Бер яҡтан, тәмәке тартыу кеүек яман ғәҙәткә эйә әҙәмдәрҙе бары "кеҫәләренә һуғып" ҡына аҡылға ултыртырға булалыр. Ә кемеһенә был сара ла кәртә түгел, уларға юл берәү. Статистика буйынса, Рәсәйҙә йыл һайын алкоголдән үлеүселәр һаны 500-700 мең кеше тәшкил итһә, тәмәке ағыуына ыҫланып, яҡты донъя менән үҙҙәре теләп бәхилләшеүселәр һаны ла шунан ҡалышмай: 350-450 мең кеше. Был үткән быуаттың 90-сы йылдары менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк. Тәмәке тыуҙырған сирҙәргә 40-45 йәшлектәр күберәк бирешә икәнен дә һыҙыҡ өҫтөнә ала рәсми статистика.

**Әйткәндәй, тәмәкене медиктар ағыулы шприц менән дә сағыштыра. Уның составында никотиндан алып углерод окисы, ыҫмала, ацетон, мышъяҡ, кадмий... барлығы 4 меңгә яҡын химик берләшмә һәм 40 төрлө канцероген барлығы иҫбатланған. Шулай итеп, ҡайһы юлды һайларға - һәр кем үҙенең аң һәм дә ихтыяр кимәленән сығып хәл итә. "Ташлап булмай" тип һылтаныуы еңел булһа ла, аҙағы ауыр булырын уйламай тәмәкесе, сөнки уның иртәгәһе юҡ.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Роспотребнадзор граждандарға Яңы йыл байрамдары алдынан күптәрҙең намыҫһыҙ һатыусыларҙың ҡорбандары булыуын иҫкәртә. Атап әйткәндә, ҡулланыусыларҙы йыш ҡына ташлама менән һатып алынған тауарҙы кире ҡайтарып йәки алмаштырып булмай тип ышандыралар.Ведомствола ысынында иһә акция буйынса һатып алынған теләһә ниндәй тауарҙы 14 көн дауамында ғәҙәттәге тәртиптә алмаштырырға йәки кире ҡайтарырға мөмкин тип аңлаттылар.

✓ Быйыл декабрҙә Өфөлә Республика клиник психотерапия үҙәген һәм Үрге Йәркәй ауылында поликлиниканы тапшырыу күҙаллана. Ағымдағы йыл аҙағына Туймазыла һәм Дүртөйлөлә ике балалар поликлиникаһын, Языково ауылында дауаханаsucc, онкология диспансеры корпусын сафҡа индереү планлаштырыла. Бөгөн Затонда, Нуғайҙа, Бөрөлә һәм Саҡмағошта поликлиникалар проектлана. Әлеге мәлдә 17 һаулыҡ һаҡлау объекты проектлаштырыла һәм төҙөлә.

✓ "Ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса хеҙмәттәр күрһәтеүгә" тигән яҙыу 2019 йылдың февраленән газ, һыу һәм электр энергияһы өсөн түләү менән оҡшаш түләү ҡағыҙында яҙыла башлай. Иҫәп электр энергияһы өсөн түләү күләме менән бер квитанцияла яҙыла. Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, күп фатирлы йортта йәшәүсе бер кешегә яҡынса түләү - айына 140,92 һум, шәхси йортта йәшәүсегә айына 200,54 һум тәшкил итә.

✓ Рәсәй тимер юлдары Яңы йыл алдынан һәм ҡышҡы каникулдарҙа өҫтәмә поездар ебәрә. Расписаниеға 14 рейс өҫтәлгән. 25, 28 һәм 31 декабрҙә, шулай уҡ 1, 5 һәм 6 ғинуарҙа Өфөнән Мәскәүгә өҫтәмә өс состав ебәрелә. Ошондай уҡ рейстар һаны кире йүнәлештә лә, Мәскәүҙән Өфөгә, юллана.

✓ Башҡортостанда бишенсе "Ғаилә ҡиммәттәре - 2018" фестиваль-конкурсына ғаризалар ҡабул ителә. Бишенсе миҙгел темаһы: "Ихатала байрам ойошторайыҡ". Ҡатнашыуға документтарҙы 12 ноябргә тиклем ебәрергә мөмкин. Еңеүселәрҙе 24 ноябрҙә "Ғаилә донъяһы. Әсәлек һәм балалыҡ" махсуслаштырылған күргәҙмә-форумы сиктәрендә бүләкләйҙәр.

✓ *"Һәр берегеҙ ҙур ҡаһарманлыҡ ҡылған, бәләкәй булһағыҙ ҙа, йөрәгегеҙ ҙур. Һеҙ ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күрһәткәнһегеҙ. Шундай балаларҙың үсеүенә ғорурланабыҙ."*



ҠЫҪҠАСА

# ХАЛЫҠ ҺҮҘЕ - ӨҪТӘ

✓ **Өфө прокуратураһы Башҡортостандың баш ҡалаһы хакимиәтенә Нуғай, Жилин һәм Зинин ҡасабалары эргәһендә зыярат урынлаштырыуҙы тыйыу тураһында бойороҡ еткерҙе.** Сәбәптәр араһында ҡануниәтте боҙоу билдәләнгән. Ул һаҙлыҡтарҙы киптереү эштәре башҡарылған һаҙмат урында ҡәберлектәр урынлаштырыуҙы тыя. "Төҙөлөш заказсыһы яңы ерләү урындары булдырыуға экологик һәм санитар-гигиена экспертизаһынан ыңғай һығымта алманы. Шулай уҡ ошо биләмәнең ял итеү зонаһына ҡараған-лыҡтан зыярат урынлаштырыу мөмкин булмау иғтибарға алынды", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр күҙәтеү ведомствоһының матбуғат хеҙмәтендә. Билдәле булыуынса, 2018 йылдың көҙөндә Өфөнөң Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы 40 гектар ерҙе межалау һәм ер участкаһын артабан ерләү өсөн файҙаланыуға дәүләт һатып алыуҙарын ойоштороуҙы белдергәйне. Биләмәләр өс тораҡ пункты тирәһендә урынлашҡайны. Нуғай, Жилин һәм Зинин ҡасабаһында йәшәүселәр был дай "күршелеккә" ҡаршы сыҡты һәм прокуратураға мөрәжәғәт итте.

✓ **Өфөлә 128 мәктәптең бишәүһендә генә балалар бер сменала уҡый.** Был баш ҡаланың яңы биҫтәләрендә торлаҡ төҙөү мәктәп, балалар баҡсалары һәм поликлиникалар һалыу менән бергә алып барылмауға бәйле. Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров биләмәләрҙе төҙөү буйынса килешеүҙәрҙә төҙөүселәрҙең социаль объекттар һалыу буйынса бурыстары аныҡ билдәләнмәүгә, төҙөлөштөн, файҙаланыуға тапшырыуҙың һәм уларҙы муниципалитеттар балансына индереүҙең аныҡ ваҡыты булмауға ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. Төҙөүселәр Өфөлә комплекслы төҙөлөш буйынса 5 һәм биләмәләрҙе төҙөү буйынса 47 килешеүҙең береһе буйынса ла социаль объекттар төҙөмәгән.

✓ **Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты Өфөлә клиник онкология диспансерының төкәтмәһен төҙөү барышы тураһында отчет бирҙе.** "Объектта каркас буйынса монолит эштәре тамамланған. Ҡаттарҙа кирбестән буҡкәләр һалыу тамамланыу алдында. Биҙәкләү эштәре алып барыла. Бинала тәҙрәләр ҡуйыу эштәре 80 процентҡа тамамланған. Бынан тыш, эске инженер селтәрҙәре эштәре бара. Ҡыйыҡта пар барьеры ҡуйылған, йылытҡыс һалынған. Төҙөүселәр фасад эштәрен башҡара, йылытыла", - тип аныҡлыҡ индерҙеләр дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә. Шуны билдәләп үтәйек: диспансерҙың яңы хирургия корпусында индивидуаль йылылыҡ пунктын монтажлау һәм тышҡы канализацияны төҙөү эштәре бара. Объектты файҙаланыуға тапшырыу 2019 йылдың октябренә билдәләнгән.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ЕҢ ҺӘМ БҮЛӘКЛӘН!

**Башҡортостанда халыҡ-ара, бөтә Рәсәй һәм төбәк-ара олимпиада еңеүселәрен, призерҙарын, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларҙы матди яҡтан дәртләндереү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Тейешле указға республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, 2018 йылдан "уҡыусыларҙың интеллектуаль һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй һәм төбәк-ара олимпиадаһы (конкурсы) еңеүселәренә һәм призерҙарына, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға Башҡортостан Республикаһы Башлығының йыллыҡ премиялары булдырыла. Олимпиада еңеүселәре һәм уларҙы әҙерләгән педагогтар өсөн премия күләме 60-ар мең һум тәшкил итә. Призерҙарға һәм уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға 30-ар мең һум тапшырыла.

Олимпиадалар мәғариф өлкәһендәге федераль башҡарма власть органдары бойороҡтары менән раҫланған олимпиадалар исемлектәренә инергә тейеш. "Бер нисә олимпиада еңеүселәренә һәм (йәки) призерҙарына премия һәр ҡаҙаныш өсөн айырым түләнә", тип билдәләнә Указда.

## ЙӘШ ГЕРОЙҘАР

**Башҡортостанда йәшәгән ете бала Республика Йортона Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән осрашыуға килде. Йәш геройҙар Рәсәй Ҡотҡарыусылар союзы Дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһының төрлө наградаларына тәҡдим ителде.**




"Һәр берегеҙ ҙур ҡаһарманлыҡ ҡылған, бәләкәй булһағыҙ ҙа, йөрәгегеҙ ҙур. Һеҙ ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күрһәткәнһегеҙ. Шундай балаларҙың үсеүенә ғорурланабыҙ. Ошо бәләкәй генә кеҙҙәргә ҡарап, тормоштоң матур икәнлеген һәм республиканың үсешәсәген, йәшәйәсәген, барыһы ла яҡшы буласағын аңлайһың", - тине төбәк етәксеһе.

Радий Хәбиров шундай ярҙамсыл балалар тәрбиәләп үҫтергән балаларҙың әсәләренә лә рәхмәт һүҙҙәрен әйтте. Уларҙың иң кесеһе - Өфөнән дүрт йәшлек Алексей Гребешков. Ул күрше йортта янған сыҡҡанын күреп, атаһына хәбәр иткәне өсөн төбәк етәксеһенән Рәсәй Ҡотҡарыусылар союзының рәхмәт хатын алды. Шулай уҡ Хәйбулла районының Һамар ауылынан Байназар Хәйбуллин, Күгәрсен районының Мораҡ ауылынан Азамат Арапов, Стәрлетамаҡ районының Талачев ауылынан Илһөйәр Биҡколова, Ишембай районының Үрге Әткол ауылынан Ирек Үмәрбаев, Бәләбәй районынан Фәдис Сәлимгәрәев, Өфөнән Степан Литвинов та Рәсәй Ҡотҡарыусылар союзының наградаларына лайыҡ булды. Радий Хәбиров йәш геройҙарҙы наградалары менән ҡотлап, яҡшы уҡыуҙарын теләне.

## ҺҮҘ ТЕЙҘЕРҘЕЛӘР

**Радий Хәбиров Башҡортостандың ауыл хужалығы министры Илшат Фәйзрахмановҡа башҡорт балының данын яҡлау системаһын төҙөргә ҡушты.**



Быға интернеттағы, "Красноярскиҙа һатылған башҡорт балы башҡалар араһында иң сифатһыҙы тип танылған һәм аҙыҡтың сифат күрһәткестәренә тап килмәй" тигән мәғлүмәт сәбәпсе булды. Красноярск стандартлаштырыу, метрология һәм һынауҙар төбәк үҙәге төҙөгән рейтингка яраҡшлы, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең тәбиғи башҡорт балы Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә етештерелгән татлы ризыҡ өлгөләре араһында һуңғы, 13-сө урынды алған. Учреждение был төбәккә бал оҙатмай һәм уҙған йылдарҙа тап ошонда "Башҡорт балы" исеме аҫтында ялған бал һатҡандар, тип раҫлай Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры Әмир Ишемғолов. Уның һүҙҙәренсә, ошондай агрессив сәйәсәт 2021 йылда Өфөлә "Апимондия" бөтә донъя конгресын уҙғарыуға бәйле. Шул рәүешле башҡорт балының данын төшөрөргә теләйҙәр. Учреждение Красноярск крайындағы стандартлаштырыу, метрология һәм һынауҙар дәүләт төбәк үҙәге исеменә үҙенең абруйын яҡлау тураһында Арбитраж судҡа ғариза яҙған.

## КҮПЕРЛЕ БУЛАСАҠТАР!

**Башҡортостандың Бөрйән районында йәйәүлеләр өсөн ике күпер төҙөлөшө 2011 һәм 2016 йылдан һуҙыла килә. Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә "тарихи" хәл тураһында район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов һөйләне.**

Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров оҙаҡ төҙөлгән күперҙәр менән бәйле хәлдә ҡаты тәнҡитләне. Уның ҡушыуы буйынса чиновниктар Бөрйән районында оҙаҡ төҙөлгән күперҙәрҙе ҡараны. Башҡортостандың Транспорт буйынса дәүләт комитеты хәбәре буйынса, ведомство етәксеһе Тимур Мөхәмәтйәнов, район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов, республиканың Торлаҡ һәм төҙөлөштө күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты вәкилдәре, Башҡортостандың Юл хужалығы идаралығы, "Башкирдортранспроект" институты, төҙөүсе ойошмалар - "Уралдорстрой" һәм "Лидер" етәкселәре, төҙөлөп бөтмәгән объекттар урынлашҡан ерҙә кәңәшмә үткәрҙе. Һәҙәмтәлә, Нәби һәм Яңы Монасип ауылдарындағы күпер объекттары буйынса "юл карталары" төҙөлдө. Нәби ауылы янындағы күперҙе шул уҡ төҙөүсе, 2019 йылдың апреленә бөтә етешһеҙлектәрҙе бөтөрөп, тамамлай. Яңы Монасип эргәһендәге күперҙе икенсе ойошма төҙөп бөтөрә, ул уны 2019 йыл дауамында тапшырырға тейеш тип билдәләнде.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң "Кейем-һалым банкы" мохтаждар өсөн йылы кейем йыя. Әле ҡышҡы аяҡ-кейем, курткалар, ойоҡбаш һәм башлыҡтар айырыуса кәнүҙәк. Белгестәрҙең берҙән-бер үтенесе - хәйриәлеккә бирергә ниәтләнгән әйберҙәрҙең таҙа һәм бөтөн булыуы. "Кейем-һалым банкы" Цюрупа урамы, 102 адресы буйынса "Ғаилә" республика ресурс үҙәге базаһында эшләй.

✓28 ноябрҙә Өфөнөң 2030 йылға тиклемге социаль-иҡтисади үҫеше стратегияһы буйынса тыңлауҙар үтә. Өфө халҡы документтың проекты менән сайтта таныша һәм 22 ноябргә тиклем уға үҙгәрештәр, өҫтәмәләр буйынса тәҡдимдәрен электрон почтаға (gorsovet@ufacity.info) ебәрә ала.

✓6 ноябрҙән "Башавтотранс" ҡалатирә маршруттарына күп кеше һыйышлы өҫтәмә "НефАЗ" маркалы автобустар булә. Өс өҫтәмә автобус 107-се "Өфө - Михайловка - Суровка - "Озерки" коммерцияға ҡарамаған баҡса ширҡәте"; биш автобус 108-се "Өфө - Урман хужалығы"; ике автобус Дмитриевка аша 109-сы "Өфө - Шемәк ауыл хужалығы предприятиеһы"; дүрт автобус 112-се "Өфө - Миловка" һәм дүрт автобус 115-се "Өфө - Алексеевка" маршруттары буйынса юллана.

✓Балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы программаһы эшләй башлағандан алып республикала 295 мең әсәлек капиталы сертификаты бирелгән. Әсәлек капиталының күләме ваҡыты менән индексациялана. 2019 йылда ул 453 мең һум була, 2020-лә - 470 мең һумға тиклем, ә 2021 йылда 489 мең һумға ҡәҙәр арта. Индексация бюджет проектында билдәләнгән. Әле Рәсәйҙә әсәлек капиталының күләме 453 мең 26 һум тәшкил итә.

✓Башҡортостандың Милли музейы ремонтҡа ябыла. Республикалағы иң ҙур музейҙың экспозициялары бер айға - 2018 йылдың 30 октябренән 30 ноябренә тиклем ябыла. Учреждениеның генераль директоры Марат Зөлҡәрнәев 2019 йылда музейҙы күләмлерәк реэкспозиция көтөүе тураһында хәбәр итте.

✓Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе мессенджерҙарҙа пенсия тәьминәте тураһында дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәт таратыу осраҡтарының йышайыуы хаҡында иҫкәртте. Атап әйткәндә, пенсионерҙарға булмаған өҫтәмә аҡса алыу өсөн Пенсия фондына барырға тәҡдим итәләр. Фондта һыҙыҡ өҫтөнә алыуҙарынса, был мәғлүмәт дөрөҫлеккә тап килмәй.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусы булып Радий Хәбировтың ҡайтыуы бар нәмәгә битараф булып йәшәп ятҡан йәмғиәткә ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғаған кеүек тәҫир итте. Был ҡала округы хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмә барышында ла һиҙелде, сөнки ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин ултырышты уҙған аҙнала булған яңылыҡтарҙан, йәғни Республика Йортонда үткән семинарҙан һәм унда билдәләнгән өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе барлауҙан башланы.**

# МӨРӘЖӘҒӘТЕҢДЕ ИШЕТМӘЙҘӘРМЕ?

## Социаль селтәрҙәргә яҙ!

"Социаль селтәрҙәр тормошобоҙға актив килеп инде, улар аша халыҡ яңылыҡтар менән генә танышып ҡалмай, ҡалалағы төҙөкләндереү эштәре, йорттарҙы, ихаталарҙы ҡарау, йәмәғәт транспорты һәм башҡа мәсьәләләр буйынса үҙен борсоған проблемалар тураһында хәбәр итә. Беҙҙең бурыс: граждандарҙан социаль селтәрҙәр аша килгән мөрәжәғәттәргә иғтибар бүлеү. Әле республикала "Инцидент" тип аталған система эшләй башлаясаҡ, ул ошондай мөрәжәғәттәрҙе күҙәтеп барасаҡ һәм уларҙы хәл итеү өсөн урындағы үҙидара органдарына йүнәлтәсәк", - тине хакимиәт башлығы. Был йәһәттән ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәре һәм идаралыҡтар етәкселәре өсөн махсус семинар ҙа ойошторолдо.

Өлфәт Мансур улы уҙған аҙнала ҡала предприятиелары һәм ойошмаларын тикшереүе тураһында һөйләне. "Дөйөм алғанда, техника көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә эшләүгә әҙер, кәрәкле материалдар, ҡом-тоҙ ҡатнашмаһы етерлек күләмдә булмаһа ла, бар, уны әҙерләү дауам итә. Әммә коммуналь техниканың күп өлөшө иҫкергән, улар 10 йыл дауамында тәүлек әйләнәһенә ҡулланыла. Ҡаланы теләһә ҡайһы миҙгелдә тиҙ һәм ваҡытында таҙартыу өсөн автопаркты яңыртыу талап ителә. Беҙгә был йүнәлештә ныҡлы эшләргә кәрәк. Хөкүмәттә әлеге ваҡытта аңлау таптыҡ, тиҙ арала мәсьәлә хәл ителер, тип уйлайым. Әлбиттә, автопаркты бер юлы тулыһынса алмаштырабыҙ тимәйем, әммә был мәсьәлә менән системалы шөғөлләнәсәкбеҙ", - тине ул һәм шулай уҡ коммуналь хужалыҡ тармағында кадрҙарҙың йыш алмашыныуын да мөһим проблема тип белдерҙе. Быға аптырайһы түгел, сөнки күптән мәғлүм булыуынса, төҙөкләндереү эштәрен башҡарған хеҙмәткәрҙәрҙең күпселеген республиканың баш ҡалаға яҡын ятҡан район-ауылдарынан килеп эшләүселәр тәшкил итә. Был - туйып һикереүҙән түгел, ә ауылдарҙа ғына түгел, хатта район үҙәктәрендә лә эш булмауы хаҡында һөйләй. Шул уҡ ваҡытта һәр кемдең ғаиләһе, балалары бар. Шуға күрә улар тейешле шарттар булмаған ерҙәрҙә лә йәшәргә риза. Баш ҡалала ситтән килеп коммуналь хеҙмәттәрҙә эшләүселәр өсөн ятаҡтар төҙөү тәжрибәһе бар, әммә әлегә бындай миҫал бирәү - Совет районында ғына.

Тик коммуналь хеҙмәттәрҙә хатта "аҫаба гастарбайтерҙар" ҙа оҙаҡ тотҡарланмай. Сәбәбе - ауыр һәм ҡатмарлы эш өсөн хеҙмәт хаҡының түбән булыуында. Йыл дауамында был тармаҡта бер районда ғына 600-ҙән алып 1000-гә тиклем кеше алмашына. "Кадрҙар, эш хаҡтары мәсьәләһе менән шөғөлләнергә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәренең эшен баһалау варианттарын ҡарарға кәрәк, сөнки уларҙың хеҙмәтенә ҡаланың таҙалығы бәйле", - тине Өлфәт Мансур улы. Бәлки, ҡаланың яңы башлығы, башҡа тармаҡ хеҙмәткәрҙәренең дә эш хаҡтары менән ҡыҙыҡһыныр, тигән өмөт көҙгө һалҡын көндәрҙә күңелде йылытып ебәрҙе әле. Ни тиһәң дә, бөгөн күп тармаҡтарҙа эш хаҡтары, етәкселәр, арта, тип әйтеүгә ҡарамаҫтан, тауыҡ көләрлөк...

Ҡабат коммуналь-хужалыҡ тармағына урап ҡайтҡанда, хакимиәт башлығы белдереүенсә, раҫланған нормативтарға ярашлы, был учреждениелар ҡала территорияһын тотоу һәм ремонт эштәре өсөн ҡала бюджетанын аҡса ала. Йылдың 9 айында Киров, Ленин, Октябрь, Орджоникидзе райондары норматив сиктәрендә эшләһә, Дим, Калинин, Совет райондары артыҡ сығымдар тотонған. "Был персоналдың эшен йомшаҡ ойоштороу һәм район хакимиәттәре тарафынан тейешле контроль булмауҙың сағылышы", - тине Өлфәт Мансур улы һәм нормативтарҙың артыу сәбәбен асыҡларға ҡушты, район учреждениелары үҙ бурыстары аткара алмаған осраҡта, уларҙың вәкәләттәрен ҡала идаралығына тапшырыу мөмкинлеген ҡарау бурысын йөкмәтте.

Кәңәшмәлә шулай уҡ Өфө ҡалаһы территорияһында эшләүсе төҙөлөш ойошмалары адресына ла, шул иҫәптән ҡала хакимиәтенең уларҙың эшен контролләгән бүлектәре етәкселәренә лә иҫкәртеүҙәр булды. "Бөгөн ҡалала ҙур күләмдә торлаҡ төҙөлә, әммә социаль объекттар төҙөлөшө был процестан артта ҡала. Артабан былай дауам итеүе мөмкин түгел, сөнки торлаҡ менән инфраструктура үҫеше араһында ҙур айырма барлыҡҡа килеүе ихтимал. Был проблеманы хәл итеү өсөн тиҙ арала саралар күрергә кәрәк. Төҙөлөш бизнесы социаль яуаплылыҡ тойорға тейеш. Ә беҙҙә эш башында вәғәҙә ителгән балалар баҡсалары, төҙөлөш барышында эҙһеҙ генә юғала ла ҡуя. Шуға күрә быға тиклем төҙөлгән барлыҡ килешеүҙәрҙе ҡабаттан ҡарап, уларҙы анализлап, тәҡдимдәр индереүегеҙҙе көтәм", - тине ҡала хакимиәте башлығы яуаплы белгестәргә.

Социаль объекттар тураһында һүҙ башлағас, Өлфәт Мансур улы тағы ла бер мәсьәләгә иғтибар йүнәлтте. Ул да булһа, балалар баҡсалары, мәктәп ихаталарының яҡтыртылыуы һәм һаҡланыуы. Был йәһәттән ул социаль объекттар территорияларының яҡтыртылыуын яҡшыртыу буйынса программа әҙерләп, мәсьәләне хәл итеүҙә Хөкүмәт ярҙамына ла өмөтләнергә мөмкин булыуын белдерҙе.

Шулай уҡ сарала быға са даими ҡаралып килгән юлдарҙы ремонтлау, төҙөкләндереү мәсьәләләре, киҙеү эпидемияһы торошо буйынса сығыштар тыңланды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ТӘРБИӘСЕНЕҢ ЭШЕН...

## нисек баһаларға?

**Заманға һылтанып ҡына ҡуйыу урынһыҙ һымаҡ булһа ла, бөгөнгө ысынбарлыҡ шулай: бала тәрбиәһе мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре елкәһендә. Ата-әсәһе эшкә киткәндә балалар баҡсаһына килеп, көн дауамында тәрбиәселәр ҡарамағында ҡалған бала кискә генә өйгә ҡайтып инә. Шуға ла мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында эшләгән педагогтарға йылдан-йыл һөнәри талаптар ҙа арта бара. БР Мәғарифты үҫтереү институтында үткән "Башҡортостан Республикаһы мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл тәрбиәсеһе-2018" конкурсы ҡатнашыусылары ла түңәрәк ҡорҙа ошо турала фекер алышты.**

Был конкурс 2012 йылдан алып ойошторола. Быйыл унда республиканың 9 ҡалаһынан һәм 40 районынан бөтәһе 51 педагог ҡатнашты. Конкурстың тәүге ике этабында юғары күрһәткестәргә өлгәшкән 11 тәрбиәсе түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыу мөмкинлеге алды. БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова ҡорҙағы һөйләшеүҙе үҙе алып барҙы һәм тәрбиәселәргә генә түгел, чиновниктар өсөн дә актуаль булған мәсьәләне күтәрҙе: мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһының эшен һәм унда эшләгән педагогтарҙың хеҙмәт сифатын нисек баһаларға? Гөлназ Радмил ҡыҙы конкурсанттарға ошо һорау буйынса үҙ фекерен белдерергә тәҡдим итте. "Балалар баҡсаһына килеп ингәс тә, уның ФГОС талаптарына яуап биреүен-бирмәүен нисек билдәләргә?" - тип яңғыраған һорауға тәрбиәселәр, педагогтың эш программаһын, календарь планын, тәрбиәсенең портфолиоһын һәм башҡа мотлаҡ тултырылырға тейешле документтарҙы, күргәҙмә материалдарҙы тикшерергә, предмет-үҫеш мөхите булдырылыуға иғтибар итергә кәрәк, тигән яуаптар бирҙе. Балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә педагогтарҙың ҡағыҙ эшенә күмелеп ултырыуын һәр ваҡыт кире күренеш тип баһалағанғамы, бындай яуапты ишетеүе сәйер тойолдо. Үҙҙәре үк төрлө отчет яҙыуҙан бушап, балаларға күберәк иғтибар бүлә алмауға зарланған педагогтар бында килеп учреждениеның да, үҙ хеҙмәтенең дә һөҙөмтәһен әлеге лә баяғы ҡағыҙҙа яҙылғандарға ҡарап баһаларға тәҡдим итһен әле! Әйткәндәй, был яуап министрҙы ла ҡәнәғәтләндермәне, ул шунда уҡ ҡағыҙҙа эш бер төрлө күрһәтелеүе, ә ысынбарлыҡта бөтөнләй башҡаса булыуы ла бар, тип конкурстанттарҙың хәтеренә төшөрҙө. Шунан инде фекер алышыуҙа ҡатнашыусылар ата-әсәләрҙең фекерен ишетеү, аноним һорау алыуҙар үткәреү мөһим булыуын билдәләп үтте. Стәрлетамаҡ ҡалаһы 77-се һанлы балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе Мария Заплохова ғына, төп критерий бала һәм тәрбиәсе араһындағы мөнәсәбәт булырға тейеш, тип билдәләне. Әйткәндәй, конкурс һөҙөмтәләре буйынса Мария Владимировна Рәсәй кимәлендәге һөнәри конкурста республикабыҙ намыҫын яҡлаясаҡ.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бөйөр шешкәндә

❖ Гломерулонефрит - ике яҡ бөйөрөҙөң дә тотош шешеүен дауалау өсөн 3 балғалаҡ кориандр орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Ауырлы саҡта, миокард инфаркты, тромбофлебит ваҡытында был дауаны ҡулланыу ярамай.

❖ Кориандр ашҡаҙан ауыртҡанда ла файҙалы. 1 ҡалаҡ кориандрҙы эмаль һауытҡа һалып, ярты литр һыу ҡойоп, талғын утта ҡайнау хәтенә еткерергә, һөҙөргә һәм термосҡа ҡойорға. Көнөнә 2-3 тапҡыр 50 грамм эсергә.

### Дәрсен

❖ Юғары ҡан баҫымын нормаға килтерергә дәрсен (корица) ярҙам итә. 1 балғалаҡ дәрсенде 1 стакан ҡатыҡҡа һалып болғатырға һәм йоҡлар алдынан эсергә.

### Ангина

❖ Ангинаны тиҙ генә дауалау өсөн 32 бөртөк ҡәнәферҙе эмаль һауытҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, йылы итеп төрөп, төнәтергә. 12 сәғәттән һуң һөҙөп, ауыртҡан тамаҡты сайҡатырға. Тәүлегенә 4 тапҡыр ҡабатларға.

### Ҡуянтубыҡ

❖ Һейҙек-енес өлкәһе системаһы эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн 100 грамм ҡуянтубыҡ (пастернак) тамырына 1 литр аҡ шарап, ярты литр һыу өҫтәп, ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға. Кәстрүлде уттан алғас та 5 ҡалаҡ бал, 1 лимон һуты, 10 тамсы 5 процентлы йод ҡушып, болғатырға, һөҙөргә һәм көнө буйы йотомлап эсергә.

### Лавр япрағы

❖ Аяҡта бәшмәктәр булһа, 200 грамм лавр япрағына ҡайнар һыу, бер аҙ һеркә өҫтәп бешектәргә лә, ошо төнәтмәгә аяҡтарҙы тығып ултырырға. Дауаны көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ



Константин УШИНСКИЙ

# ХАЛЫҠ РУХЫ...

## алыштырғыһыҙ хазина

**Ошоға тиклем ниндәй генә фекерҙәр әйтелмәһен, тарихта халыҡты йәшәтеүсе берҙән-бер сығанаҡ - ул халыҡ рухы. Һәр халыҡҡа тарихта айырым йөкләмә билдәләнгән. Һәм әгәр теге йәки был халыҡ йөкләмәһен үтәү бурысын онота икән - ул йәшәйеш сәхнәһенән китергә тейеш: уның башҡаса кәрәге ҡалмай. Тарих ҡабатланмай. Рухы булмаған халыҡ йәнһеҙ тән, ундай тәндәр, йәшәйеш ҡанундары буйынса үҙенсәлеген һаҡлаған башҡа тәндәр эсендә тарҡалыу һәм юҡ ителеүгә дусар була.**

Халыҡ үҙе йәшәгән саҡта тәбиғәт ҡанундарына буйһона, йәшәүҙән туҡтаһа, фән ҡанундарына тороп ҡала. Ә фән бөтә халыҡтарҙы ла бер ҡалыпҡа һалып өйрәнә.

Халыҡ рухы дәүләттең тарихи йәшәйешендә берҙән-бер сығанаҡ икән, тимәк, айырым кешеләр ҙә үҙенең ижтимағи эшмәкәрлеге өсөн көстө ошо сығанаҡтан ала. Шулай булғас, йәмәғәт тәрбиәһе, ижтимағи йәшәйештең иң мөһим шарттарының береһе булараҡ, яңынан-яңы быуындар үҙенән алдағы быуындар менән бәйләнеште халыҡ рухы аша алып барырға тейеш. Һәр кешене йәмғиәт ағзаһы булараҡ тәрбиәләгән саҡта, уны ошо йәмғиәт менән бәйләп торған рухҡа иғтибар итмәү мөмкинме һуң?

Кешелә халыҡ рухы көслөрәк булған һайын ул рух талаптарын нығыраҡ аңлай, бөйөк шәхестәрҙең эшмәкәрлеген аңлау өсөн кеше үҙендә лә рух орлоғо йөрөтөргә тейеш.

Кешелә халыҡ рухын үҫтереү һәм нығытыу маҡсатын ҡуйған йәмәғәт тәрбиәһе бер үк ваҡытта уның аңын һәм зиһенен дә үҫтерә. Тимәк, айырым кеше генә тәрбиәләнмәй, ә тотош халыҡтың үҙаңы тәрбиә ала һәм йәмғиәт үҫешенә, уның теленә, әҙәбиәтенә, ҡанундарына, бер һүҙ менән әйткәндә, тотош тарихына ҡеүәтле һәм ыңғай йоғонто яһай.

Йәмғиәт тәрбиәһененең төп нигеҙе - ғаилә тәрбиәһе. Сөнки бала ғаиләлә ата-әсәһенең холоҡ-фиғелен үҙләштерә һәм уларҙы артабан камиллаштырыуға нигеҙ ала.

Быңдай тәрбиә алған яңы быуындар үҙ халҡының тарихи холоҡ-фиғелен һаҡлай һәм уны артабан үҫтерә.

Тәрбиә эшендә тәрбиәләүселәргә йыш ҡына ғаилә ағзаларынан күскән етешһеҙлектәр менән осрашырға тура килә. Ләкин был тотош халыҡтың булмышында ятҡан холоҡ-фиғелгә ҡағылмай.

Тарихи яҡтан формалашҡан һәр халыҡ - Алла ижадының иң күркәм емештәренең береһе, тәрбиәгә иһә ошо бай һәм саф сығанаҡтан файҙаланырға кәрәк.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# БЫЛ СПОРТ ТӨРӨНДӘ...

## ҡатын-ҡыҙға урын юҡ

**Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм Әрмәнстан, Ҡаҙағстан илдәренән "Батыр даны - көрәштә" тип инанған 160 көрәшсе Өфөгә Владимир Алексеевич Борман иҫтәлегенә арналған грек-рим көрәше буйынса Бөтә Рәсәй турнирына йыйылды. Профессиональ спорт менән шөғөлләнгән ир-егеттәр өсөн был сара республикала утыҙ өсөнсө тапҡыр ойоштоtől. Советтар Союзының данлы грек-рим көрәшселәрен тәрбиәләгән Владимир Бормандың шәхесен ихтирам итеп үткәрелгән ярыш күптән йолаға әйләнгән булыуы менән генә түгел, матур алыштар һәм зал тулы көйәрмәндәр менән үҙенсәлекле булды.**



Грек-рим көрәше быуаттарға һуҙымлы тарихы менән генә түгел, беҙҙең көндәргәсә ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашмаған берҙән-бер спорт төрө булыуы менән дә үҙенсәлекле. Ысын ир-егеттәр ярышы, тиһәк тә хата булмаҫ уны. Башҡортостанда грек-рим көрәше менән шөғөлләнеүселәр Советтар Союзы осоронда ла, хәҙер ҙә байтаҡ ҡына. "БР Спорт көрәше федерацияһы" төбәк спорт йәмғиәт ойошмаһы вице-президенты Рәфис Садиҡов әйтеүенсә, әлеге көндә беҙҙә 2500 бала грек-рим көрәше менән шөғөлләнә. Республиканың Өфө, Белорет, Нефтекама, Ағиҙел, Салауат, Стәрлетамаҡ, Күмертау, Сибай ҡалаларында һәм Бәләбәй районындағы Приют ҡасабаһында, Иглин ауылындағы секцияларҙа 68 тренер эшләй. Грек-рим көрәшенә балаларҙы 10-12 йәшлек саҡта алырға тырышалар, бының өсөн спорт-һауыҡтырыу төркөмдәренә 7-8 йәштән ҡабул итеү мөмкинлеге бар. Әлбиттә, грек-рим көрәшселәрен тәрбиәләүсе төп үҙәк - Өфө, ҡаланың һәр районында тиерлек спорт мәктәптәре, клубтар эшләй. Шуға Владимир Борман иҫтәлегенә арналған турнирҙа Башҡортостандан ҡырҡҡа яҡын көрәшсе майҙанға сығыуы ғәҙәти күренеш кеүек ҡабул ителде. Улар араһынан ун ауырлыҡ категорияһы буйынса 4 чемпион (Магомед Дудушев, Аслан Толов, Ислам Опиев, Азамат Бикбаев) һәм 8 призер билдәләнде. "Башҡортостандан бөтәһе ҡырҡҡа яҡын көрәшсе ҡатнашты, беҙҙең олимпиада резервы мәктәбенән 22 кеше килгәйне. Күберәк йәштәрҙе сығарҙыҡ, 2001 йылғы егеттәр ярышта ҡатнашырға рөхсәт алды. Ҡайһы берҙәре финалға сыға алмаһа ла, үҙ көсөн һынап, көрәшә алыуҙарын күрһәтте", - ти республика көрәшселәре тураһында БР Олимпия резервы спорт мәктәбенең грек-рим көрәше буйынса тренеры Рәмил Сираев.

"Мин Әрмәнстан, Рәсәй төбәктәренән килгән көрәшселәр менән алыштым. Беренсе урын өсөн Башҡортостандан Фәдис Вәлитов менән көрәшкә сығырға тейеш инек, дуҫтарса килешеп, был юлы еңеүҙе ул миңә бирҙе, - ти беренселекте яулаусыларҙың береһе Аслан Толов. - Грек-рим көрәше менән ун йыл шөғөлләнәм, шуның бишеһе Өфөлә. Тыуған яғым Ҡабарҙы-Балҡар республикаһына ҡарағанда бында шарттар яҡшыраҡ, тренерҙар ҙа көслө һәм профессиональ кимәлдә шөғөлләнеп була. Мин Рәсәй, Европа кимәлендәге беренселектәрҙә ҡатнашып, еңеүҙәр яулағаным булды. Киләсәктә Олимпия уйындары, донъя кимәлендәге ярыштарҙа сығыш яһарға хыялланам. Ә әлегә Башҡорт дәүләт аграр университетында икенсе курста белем алам, сөнки аҡылды, белемде камиллаштырыу ҙа мөһим тип иҫәпләйем". Аслан Толов менән әңгәмәләшкән арала Фәдис Вәлитов та көйәрмәндәр эскәмйәләре эргәһенә килеп етте. Сығышы менән Көйөргәҙе районы Ҡунаҡбай ауылынан булған егет үҙе шөғөлләнгән спорт төрөнөң тәртипкә өйрәтеүен билдәләне. "Өсөнсө синыфтан алып көрәшкә йөрөнөм, алтынсы синыфта икенсе мәктәпкә күстем һәм унда грек-рим көрәше буйынса ғына секция эшләгәс, шунда йөрөй башланым. Бында үҙеңдең характерыңды күрһәтә белеү, түҙемлек, тырышлыҡ талап ителә. Уңыш та был спорт төрөндә көрәшсенең үҙ көсөнән, таһыллығынан ғына тора", - тигән фекерҙә спорт мастеры Фәдис Вәлитов.

Грек-рим көрәшенең әһәмиәте тураһында Пенза ҡалаһының өлкән тренеры Владимир Измайлов менән әңгәмәләшергә тура килгәйне. Бөтә шөғөлләнеүселәр ҙә донъя чемпиондары булмаҫҡа мөмкин, бында иң мөһиме - йәш быуынды сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу, буш ваҡыттарын файҙалы үткәрергә өйрәтеү, тигән фекере менән урталашты ул. Владимир Измайлов менән килешмәй булмай, был йәһәттән Башҡортостандың ҙур ҡалаларында шарттар барлыҡҡа бар. Шулай ҙа ауыл ерендә йәшәгән балаларға ла мөмкинлектәр киңәйтелһә ине. Сөнки, ни тиһәң дә, ауыл малайҙарын да заман шауҡымы урап үтмәй, уларға ла үрнәк булырҙай тренерҙар, буш ваҡыттарын файҙалы үткәрергә мөмкинлек биргән спорт майҙансыҡтары кәрәк. "Сағыштырып ҡарағанда бөтә нәмә лә беленә, күптән түгел Татарстан буйлап йөрөргә тура килде. Шунда Аҡтанышта ябыҡ боҙ һарайы, яһалма ябыулы футбол яланы, спорт комплексы, лыжероллер трассаһы, бассейн булыуын күреп ҡайттым. Уйлап ҡарағыҙ, Аҡтаныш ауылында 3 мең, ә районда барлығы 9 мең генә кеше йәшәй. Беҙгә был йәһәттән эшләйһе эштәр күп әле", - ти был тураla "БР Спорт көрәше федерацияһы" вице-президенты Рәфис Садиҡов. Республикалағы хәлдәрҙе БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибовтың үҙенән дә белештек, ул әлеге көндә был спорт төрөн баш ҡаланан алыҫтағы төбәктәрҙә лә үҫтереү маҡсатында этаплы эш алып барыла, тиҙҙән Белорет ҡалаһында айырым мәктәп асыласаҡ, ә Өфөлә киләһе йыл яңы спорт үҙәге төҙөлөп бөтәсәк, тип белдерҙе. Владимир Алексеевич Борман иҫтәлегенә арналған грек-рим көрәше буйынса Бөтә Рәсәй турнирын да Руслан Таһир улы юғары баһаланы, был йолаға әйләнеп киткән сара үҙе бер тарихҡа торошло булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

**Әйткәндәй, ойоштороусылар киләсәктә турнир халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән ярышҡа әүерелер, моғайын, тип өмөтләнә. Быны өсөн Башҡортостанда тейешле кимәлдәге стадион ғына юҡ, әле ярыш үткәрелеп килгән Өфөләге "Динамо" стадионының залы мең кешене генә һыйҙыра. Ә халыҡ-ара кимәлдә ярышырлыҡ спортсылар бар - был иң мөһиме.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# БАТЫР УЛДАР

Кешеләрҙе талап йөрөгән юлбаҫарҙар ҡулына бер ярлы ғына ҡарт барып эләгә. Юлбаҫарҙар башлығы уға былай ти: "Әгәр ҙә ҡолдар баҙарында һатылыуыңды теләмәһәң, йөҙ алтын табып түлә һәм беҙ һине ирекке ебәрәбеҙ". Бахыр ҡарт, аҡса өмөт итеп түгел, ә үҙе хаҡында белгертеү өсөн яҡындарына хат яҙа. Ҡарттың улы бик изгелекле һәм ҡыйыу була. Ул атаһының хатын алыу менән уның янына йүнәлә.

- Әфәнделәр, - ти ул юлбаҫарҙарға, - мин һеҙҙән атайымды түләүһеҙ ебәреүегеҙҙе үтенмәйем. Мин беләм: һеҙ быны эшләмәйәсәкһегеҙ. Атайым бик ҡарт һәм хәлһеҙ генә. Һеҙ уны ҡоллоҡҡа һата ла алмаҫһығыҙ. Һеҙ уны ебәрегеҙ ҙә, ҡоллоҡҡа мине һатығыҙ, аҡса ла эшләрһегеҙ.

Юлбаҫарҙарҙың башлығы үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмай тора хатта. "Ҡара әле, шундай улдар ҙа бар икән донъяла! - тип һоҡланыу белдерә ул. - Беҙҙә лә кешелеклелек үлеп бөтмәгән. Мин һиңә атайыңды бүләк итәм, ана бара юлығыҙ..." Атай һәм ул шатланып өйҙәренә ҡайтып китә. Был хикәйәт Бәйғәмбәребеҙҙең шул хәҙисен иҫкә төшөрә:"Һәр бала үҙ атаһы алдында мәңге түләп бөтмәҫлек бурыслы. Әгәр ҙә ул атаһын ҡол булған сағында табып, уны һатып алып, ҡоллоҡтан ҡотҡарһа, шул рәүешле үҙенең бурысын үтәгән булыр".

*ФАРАЗДАР*

**Археологтар бахмут, именьков, турбаҫлы, кушнаренко һәм ҡара яҡуп мәҙәниәте тип атап йөрөткән ҡәүемдәр башҡорт этногенезында ярайһы уҡ билдәле эҙ ҡалдырған. Быны яҙма ҡомартҡыларҙан да, антропология мәғлүмәттәренән һәм традицион башҡорт мәҙәниәтенән дә табырға була. Тикшеренеүселәр бахмутлыларҙы башлыса фин теллеләр, ҡара яҡуп һәм кушнаренко мәҙәниәтенә ҡарағандарҙы уғырҙар менән бәйләһә, именьковсылар сығышы буйынса, минеңсә, гун ҡәбиләләре берләшмәһенә ҡараған Азов буйы аландарынан, йә булмаһа, венгрҙарҙың этногенезенда һәм тарихында әүҙем ҡатнашҡан ҡауарҙарҙан булған.**

# БЕҘҘЕҢ ТАМЫРҘАР,

## йәки алан, ҡауар һәм хионит сығышлы башҡорттар тураһында

Ф. Сөнәғәтовтың тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, турбаҫлы мәҙәниәтенең барлыҡҡа килеүе нигеҙендә ике миграцион процесс ята: беренсеһе V быуатта аландар, икенсеһе VI быуат урталарындағы Арал буйы күскенселәре менән бәйле.

Ҡытай илсеһе Чанг-Киендың беҙҙең эраға тиклем 128 йылда яҙған отчетында именьков һәм төүге турбаҫлыларҙың ата-бабалары йәшәгән район Ан-тсай провинцияһы, тип исемләнә, ә беҙҙең эра башына ҡараған боронғо ҡытай хроникаларында бахмутлыларҙың ата-бабалары Янь ҡәбиләләре тип атала. Был терминдар ҡытай транскрипцияһынан Ар-сай һәм Ар рәүешендә ҡайтарыла. Ан-тсай һүҙен аландарҙың этник компонентын тәшкил иткән аорстар, ә Янь атамаһын удмурттарҙың икенсе исеме булған ар һүҙе менән сағыштырып була. Шулай уҡ V быуатта "Кесе Хань тарихы"нда элекке Ан-тсай провинцияһының хәҙер алан халҡы йәшәгән ер булыуы тураһында әйтелә, ә был аорстарҙың аландар составына инеү факты-на тура килә. Е. П. Казакова билдәләүенсә, һуңғараҡ осорҙа йәшәүсе турбаҫлылар - хиониттар, улар ҡытай йылъяҙмаларында "хуни" тип атала, ә ҡытайҙар уларҙы бер ваҡытта ла һундар менән бутамаған.

Ҡытай йылъяҙмаларында кушнаренко һәм ҡара яҡуп мәҙәниәте кешеләре Ун-го, йәғни уғырҙар атамаһы аҫтында билдәле. 643 йылғы ҡытай сығанаҡтарында телес ҡәбиләһенә ҡараған ба-шу-кили - башҡорттар ҙа иҫкә алына, ә VIII- IX быуаттарҙа булғар һәм башҡорттарҙың ата-бабалары бохан һәм бей-дин исемдәре менән аталған.

Бахмут (ар), именьков (ҡауар), турбаҫлы (алан һәм хиона), кушнаренко (уғыр), ҡара яҡуп (мадьяр) мәҙәниәттәре ҡәүемдәренең башҡорт этногенезенда ҡатнашыуын асыҡлар өсөн уларҙы башҡорт ырыу-ҡәбилә атамалары менән сағыштырып ҡарарға кәрәк. Мәҫәлән, фин телле арҙарға башҡорттарҙың арымаҫтары, ҡауарҙарға - ҡауарҙы, аландарға - Оран (Уран), хиондарға - һыу-ун, һун, уғыр һәм һунғарҙарға - унғар, мадьярҙарға - мишәр атамалары тура килә.

Боронғо аландарҙың атамаһы төньяҡ-көнбайыш башҡорттарында Оран, йәки Уран ҡәбиләһе исемендә сағылыш тапҡан, сөнки хорезм һөйләшендә "алан" этнонимы "арйән, оран" рәүешендә яңғырай. Башҡортостандың Ғафури районындағы Ҡауарҙы ауылы көнбайыш табындарының Көлсәр араһына ҡарай, был топоним боронғо ҡауар ҡәбиләһе исеменән килеп сыҡҡанға оҡшай. Ә хиониттарҙың этник эҙҙәре башҡорттарҙың су-ун, ун, һыу-ун ырыуҙары атамаларында сағылыш тапҡан. Ошо этноним һәм уға бәйле риүәйәттәргә нигеҙләнеп, Р.Ғ. Кузеев су-ундарҙы төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының боронғо төркөмө итеп ҡарай. Ошондай риүәйәттәрҙең береһендә су-ундарҙың үҙҙәрен ысын башҡорттар тип атап, ата-бабаларының диңгеҙ буйындағы боронғо ерҙәренән Ырымбур тарафтарына, ә унан, һунар итер яңы ерҙәр эҙләп, Ағиҙел буйҙарына килеп сығыуы тураһында бәйән ителә.

"Ун" нигеҙе шулай уҡ ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә ҡараған һыу-ун, бишул нәҫеле унғар, үҫәргән, түңгәүер һәм бөрйәндәрҙең ун, ундар аралары атамаларында һаҡланып ҡалған. Ун ырыуында, ҡыпсаҡтарҙағы кеүек үк, һыу-ун аймағы бар.

Р.Ғ. Кузеев ҡыпсаҡтарға ҡараған һыу-ундар менән көнбайыш су-ундары араһында тарихи этник бәйләнеш булыу-булмауын асыҡлай алмаған. Был этник төркөмдәрҙең тамғалары араһында ла уртаҡлыҡ юҡ, су-ундарҙың тамғалары үҙенсәлекле, башҡа ырыуҙарҙыҡына оҡшамаған. Әммә су-ун ырыуының бишул-унғарҙар менән бәйләнеше булған, тип уйларға ерлек бар. Төньяҡҡа табан күсенгәнсе, су-ундар Ағиҙел үҙәнендә көн иткән. Үҙәк Башҡортостанда су-ундар көнбайыш табындарға күрше булып йәшәй, һәм был урыҫтар XVI быуат уртаһында Өфө ҡәлғәнен төҙөгәнсе дауам итә. Су-ундарҙың бер өлөшө Ағиҙел буйҙарында ҡала, һәм бында "ун" элементы ингән топонимдарҙы осратырға була.

Су-ун ҡәбиләһенең һыу-ун ырыуын Көньяҡ Урал хиониттарының туранан-тура варисҭары, тип әйтергә була. Урта быуаттарҙағы көнбайыш хроникаларында аварҙарҙың "йылға хиониттары" тип аталыуы иғтибарға лайыҡ, мәғәнәһе буйынса был "һыу-ун"дарға, йәғни "йылға (һ)ун"дарына яҡын тора. Шулай уҡ көньяҡ-көнсығыш башҡорттары ҡәбиләләре составындағы ырыу араларының һун, һуна, һундар тип аталғандары ла хиониттарға ҡарауы мөмкин. Быңдағы һуна этнонимы хиониттарҙың Авестала сағылыш тапҡан Хаона, Хиона формаларына тура килә. Р.Ғ. Кузеев та су-ун ҡәбиләһенең Урал буйҙарындағы төүге башҡорт миграцияһында ҡатнашыуын раҫлай.

Шулай итеп, су-ун ҡәбиләһе тураһындағы тарихи мәғлүмәттәр, диңгеҙ буйынан күсенеп килеү тасуирланған риүәйәттәр, су-ундарҙың Ырымбур яҡтарынан Ағиҙел, Танып буйҙарына күсенеүе, үҙәк һәм көньяҡ Башҡортостанда "ун" нигеҙе ингән этнонимдарҙың һаҡланып ҡалыуы, тик су-ундарға ғына хас булған булған тамғалар булыуы - былар барыһы ла су-ундарҙың ата-бабалары 558 йылда Ашин төркиҙәре ҡыҫымы аҫтында Һыр дарья һәм Арал буйҙарынан Уралға күсеп килгән хиониттарҙың варисҭары булған, тип иҫәпләргә ерлек бирә.

**Булат МОРАТОВ.**



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ,

## йәки Боронғо төрки донъяһына сәйәхәт

**Башҡорт халҡының килеп сығышы проблемаһы бик ҡатмарлы булып, профессиональ тарихсылар ҙа, тыуған ил һәм халыҡ тарихын үҙаллы рәүештә, әммә бик ихлас өйрәнеүсе заттарыбыҙ ҙа ошо юҫыҡта байтаҡ ҡиммәтле мәғлүмәт туплай алды. Ата-бабаларыбыҙҙың этник тамырҙары иң боронғо дәүерҙәрҙә һинд-иран телле арий ҡәбиләләренә барып тоташһа, меңәр йылдар дауамында барған тарихи процесс беҙҙе төрки телле халыҡтар мөхитенә алып килгән. Ҡайһы бер фараздарға ярашлы, боронғо төрки тел үҙе лә Урал ерлегендә яралып, уны йөрөтөүселәр менән бергә Евразия киңлектәренә таралған. Нисек кенә булмаһын, бөгөн беҙ башҡорт тарихын төрки донъяһынан айырып ҡарай алмайбыҙ. Рафаэль БӘҘӘРТИНОВтың боронғо төркиҙәр тураһындағы "Тәңресселек - төркиҙәр һәм монголдар дине" исемле китабынан алынған мәғлүмәттәр уҡыусыларыбыҙ өсөн ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайбыҙ.**

### Төркиҙәр космогонияһы

Теге йәки был этносты тергеҙеү тураһында һүҙ алып барғанда уның матди көнкүреше, йәшәү рәүеше, йыр-бейеүҙәре, фольклоры тураһында һөйләү өҫтөнлөк алған. Әммә һәр халыҡтың мәҙәниәтендә иң төүҙә уның фани һәм баҡый донъяға ҡараштары - Йыһандың барлыҡҡа килеүе, кешенең, барса тереклектең килеп сығышы, йәшәү һәм үлем, ваҡыт, арауыҡ, кеше һәм ырыу бәйләнештәре, боронғо риүәйәттәр, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар тураһындағы мәғлүмәттәр урын ала.

Боронғо төркиҙәрҙең космогоник ҡараштары тураһында үҙаллы мифологик сюжеттарҙы һәм байтаҡ ҡына эпик поэмаларҙың инеш өлөштәрен өйрәнеү аша белергә була. Был текстарҙа тәү дәүер хаосынан донъя яралып, космик структуралар барлыҡҡа килеүенә сәбәп булған хәл-ваҡиғалар тураһында бәйән ителә. Донъя яратылыуы үҙе ғәжәптәрҙән-ғәжәп күренеш итеп һүрәтләнә, был башланғыс ваҡиғаның ҡасан булыуы билдәһеҙ ҡала. Донъя башы ваҡыттың һәм арауыҡтың да башланғысы булып, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ башланғыстар сиратына юл һалған. Бында донъяның ахыры юҡ, тип иҫәпләнә. Ә хәҙер ҡайһы бер космогоник сюжеттарҙы ҡарап үтәйек.

Хакастарҙа ике өйрәктең диалогынан башланған легенда бар. Уларҙың береһе икенсеһенә йылға төбөнән ҡом алып сығырға ҡуша. Сығарылған ҡомдо икенсе өйрәк төйгәс менән туғыҙ көн буйына төйә торғас, ер барлыҡҡа килә. Йылға төбөнә төшөп сыҡҡан өйрәктә тороп ҡалған ҡомдан бейек тауҙар хасил була. Ҡомдо йәшереп алып ҡалған өсөн беренсе өйрәк икенсеһенә йәшәр ер бүлеп бирмәй. Шулай ҙа, инәлеп һорай торғас, ул таяҡ эҙе тиклем генә ер алыуға өлгәшә. Ул шул ерҙе тишә лә, тишектән ер аҫтына инеп китә. Шулай итеп, улар үҙҙәре йәшәй торған мөхитте бүлеп алып, үҙ йоғонтоһо өлкәләрен булдыра. Беренсе өйрәк тупраҡтан кеше (ир заты) яһап, уның ҡабырғаһынан ҡатын затын яралта, уларға малтыуар, икмәк бирә. Ерҙә барлыҡҡа килтереүсе заттар хикәйәт башында өйрәк тип аталһа, аҙаҡ беренсе өйрәк - Алла, икенсеһе Эрлик хан, тип исемләнә башлай.

Ошо космогоник легенданың Ислам дине йоғонтоһонда ныҡ ҡына үҙгәрә биргән варианты ла осрай: "Аллаһы Тәғәлә ҡеүәте менән күл төбө барлыҡҡа килә. Аллаһ өйрәккә бойора: "Күл төбөндәге ҡомдо йот!" Өйрәк бөтә булған ҡомдо йота. Шунан һуң Аллаһ өйрәккә ашҡаҙанындағы ҡомдо тышҡы донъяға сығарып ташларға ҡуша. Тәүҙә ул шулай эшләй ҙә. Тик йотҡан ҡомоноң бер өлөшөн Аллаһтан йәшереп, үҙенә ризыҡ булыр, тип уйлап, эсендә ҡалдыра. Әммә ул ошонан һуң күбенә башлай. Ҡомдоң үҙенә зарарлы булыуын һиҙеп ҡалып, ашҡаҙанынан ҡалғанын да сығарып бөтөрә.

Ошо легендаларҙа донъя яралыуы һыу стихияһы менән бәйле рәүештә ҡарала. Донъя халыҡтары мифологияһында һыу бөтә нәмәнең тәү башланғысы, тәү дәүер хаосының эквиваленты булып тора. Һыу тыуҙырыуҙың һәм ғөмүми асылдың принцибы, агенты һәм мөхите итеп ҡарала. Һыу боронғо төркиҙәр тарафынан кеше өсөн ят һәм дошман булған донъяға тиңләнгән. Ул ендәр төйәге һәм икенсе донъяға инеү урыны итеп һаналған. Мифологик традицияға ярашлы, битте һыу менән йыуыу үлеү төшөнсәһенә тиң булған.

Донъя яратылыуы тураһындағы сюжет боронғо төрки мифологияһында тотороҡло күренеш булып, һаҡланып ҡалған. Ул Күл-тегин хөрмәтенә ҡалдырылған билдәле ташъяҙмала сағылыш тапҡан: "Өҫкө яҡта күк һауа (тәңре), аҫта ҡара ер булдырылғас, улар араһында әҙәм балалары яратылды".

**(Дауамы бар).**

✓ ***Башҡортостан хөкүмәте ҡулға алыныу сәбәпле, автономияға ҡушылырға көтөп торған Борай башҡорттары баш күтәрә һәм Борай башҡорт кантонын ойоштора. Оло Башҡортостан проектын үҙаллы тормошҡа ашыра башлай.***



**Башҡортостан автономияһының 100 йыллығын ҡаршылаған осорҙа тарихсылар менән бер үк һорауҙарҙы төрлө юҫыҡта асырға, төрлө ҡараштар, фекерҙәр барлығын асыҡларға тырышабыҙ. Өйрәнелгән ҡалыпта ғына ҡаралмай бөгөн тарих. Был өлкәлә лә үҙебеҙҙең милли күҙлектән сығып анализлауҙар, һығымталар яһауҙар бар. Сираттағы һөйләшеүҙә лә тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Марат Мәхмүт улы ҠОЛШӘРИПОВ һәм тарих фәндәре кандидаты Рәсих Батыр улы ЗӘЙТҮНОВ менән тарихи хәҡиҡәтте асыҡлау, һығымталар яһау юлындабыҙ.**

# ҮҘАЛЛЫЛЫҠТЫ

## үҙаллылыҡты беҙ

**Башҡорт халҡының тарихи яҙмаларында "ҡоролтай" тигән атама йыш ҡулланыла. Һынылыш осоронда ҡоролтай аныҡ ҡына ниндәй функциялар үтәй?**

**М. Ҡолшәрипов:** Ҡоролтайҙар, йыйындар башҡорт халҡын ауыр мәлдәрҙә туплау һәм ил алдына килеп баҫҡан мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеү йәһәтенән ҙур роль уйнаған мөһим үҙидара органы, сәйәси институт булып торған. Батша власы дөйөм ҡоролтайҙарҙы XVIII быуаттың тәүге яртыһында уҡ тыйып, юҡҡа сығарыуға өлгәшһә лә, уны халыҡ аңынан юйыуға өлгәшә алмай. 1917 йылда февраль революцияһынан һуң, үҙ яҙмышын үҙе хәл итерҙәй мөмкинлек тыуыу менән, башҡорт халҡы, боронғо замандарҙағы кеүек, тағы ҡоролтайҙарға йыйыла.

Беренсе дөйөм башҡорт ҡоролтайы Ырымбурҙа 1917 йылдың 20-27 июнендә уҙғарыла. Бында башҡорт халҡын борсоған ер мәсьәләһе - тартып алынған аҫаба ерҙәрҙе кире ҡайтарыу, милли ғәскәр төҙөү, Башҡортостандың милли-территориаль автономияһын ғәмәлгә ашырыу мәсьәләләре күтәрелә. Ҡоролтайҙың ҡарарҙарын бойомға ашырыу өсөн Башҡорт мәркәз шураһының Башҡарма комитеты һайлана.

Шул уҡ йылдың 25-29 августа Өфөлә Икенсе башҡорт ҡоролтайы үтә. Ҡоролтайҙа Петроградта үтәсәк Ойоштороу (Учредительный) йыйылышында ҡатнашасаҡ вәкилдәрҙең кандидатуралары раҫлана. Башҡорт мәркәз шураһы рәйесе Башҡарма комитеттың эшмәкәрлеге буйынса доклад менән сығыш яһай. Әхмәтзәки Вәлиди яҙыуынса, Икенсе башҡорт ҡоролтайын Өфөлә үткәреү, ҡайһы бер татар милләте лидерҙары уйлауынса, Өфөнө төрки-татар милли-мәҙәни мөхтәриәтенең үҙәге итергә маташыуҙың дөрөҫлөккә тап килмәүен күрһәтеү маҡсатынан эшләнә.

Башҡорттарҙың Өсөнсө ойоштороу (учредительный) ҡоролтайы 1917 йылдың 8 декабрендә Ырымбурҙа, Каруанһарай бинаһында асыла. Уның эшендә 223 делегат ҡатнаша. Бында Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан 15 ноябрҙә иғлан ителгән Рәсәй составындағы Башҡортостан автономияһы раҫлана. Ҡоролтай делегаттары ойоштороу һәм закондар сығарыу хоҡуғына эйә булған, 22 кешенән торған даими орган - Кесе ҡоролтайҙы һайлай. Кесе ҡоролтай үҙ сиратында үҙенең, автономияның идара органы - Башҡортостан хөкүмәтен ойоштора. Шулай итеп, 1917 йылда үткән дөйөм башҡорт ҡоролтайҙарында Башҡортостан автономияһы тыуа - башҡорт дәүләтселеге тергеҙелә.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Советтар яғына сыға. Ошо уңайҙан 21 февраль Темәс ауылында Беренсе дөйөм башҡорт хәрби ҡоролтайы уҙғарыла. Унда 92 делегат ҡатнаша. Хәрби ҡоролтай башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын хуплай, Башҡортостандың ваҡытлы революцион комитеты - Башревком һайлана. Башҡортостандағы бөтә власть Башревком ҡулына тапшырыла. 1919 йылдың мартында төҙөлгән килешеү буйынса Үҙәк совет власы Башҡортостан автономияһын таный. Шулай итеп, Рәсәйҙә ысын мәғәнәһендә федерация иткән, уның федерализм йүнәлешендәге үҫешенә нигеҙ һалған республика - Башҡортостан Совет автономияһы барлыҡҡа килә.

Ләкин бер йылдан һуң, 1920 йылдың майында, Үҙәк совет власы үҙенең декреты менән Башҡортостандың киң автономия хоҡуҡтарын юҡҡа сығара. Ошонан алып, Башҡортостан автономияһы исем өсөн генә тиерлек тороп ҡала, етмеш йылдан ашыу ошо хәлендә йәшәй.

Советттар Союзында үҙгәртеп ҡороуҙар башланыу менән башҡорт йәмәғәтселеге Башҡортостанға союз республикаһы статусын алыу мәсьәләһен күтәреп сыҡты, 1989 йылда төҙөлгән "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге был йүнәлештә әүҙем эшләне. Һөҙөмтәлә 1990 йылдың 11 октябрендә БАССР Юғары Советы Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итте.

**Автономия төҙөүҙә әүҙем ҡатнашҡан Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттары ни өсөн Башҡортостан Республикаһы составына инә алмай ҡала? Бының сәбәбенә ниндәй аңлатмалар бирергә була?**

**Р. Зәйтүнов:** 1917 йылдың 15 ноябрендә Өфө, Ырымбур, Пермь, Һамар губернаһындағы башҡорт территориялары Рәсәй республикаһының автономиялы өлөшө, йәғни Башҡортостан автономияһы тип иғлан ителә. Башҡортостан автономияһына Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙе һәм Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙендәге башҡорт территориялары ла инә. Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи фарманға Минзәлә башҡорттарынан арҙаҡлы милли хәрәкәт эшмәкәре Илдархан Мутин да ҡул ҡуя.

1917 йылдың ноябрендә Әхмәтзәки Вәлиди автономияны тормошҡа ашырыуҙың ике этаптағы проектын төҙөй (Оло һәм Бәләкәй Башҡортостан). Тәүге этапта автономияны Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә ғәмәлгә ашырырға ҡарар ителә. 1918 йылда Оло Башҡортостан сиктәрендә, шул иҫәптән Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәрендә, автономиялы идара индереү ҡарала. Әммә 1918 йылдың февралендә Башҡортостан хөкүмәте ҡулға алыныу сәбәпле, автономияға ҡушылырға көтөп торған Борай башҡорттары 1918 йылдың мартында баш күтәрә һәм Борай башҡорт кантонын ойоштора. Йәғни Оло Башҡортостан проектын үҙаллы тормошҡа ашыра башлай.

Тик тиҙҙән Борай кантоны большевиктар тарафынан тар-мар ителә.

1918 йылдың йәйендә Башҡортостан хөкүмәте ҡайтанан эш башлай. Граждандар һуғышы осоронда Оло Башҡортостан проекты артҡы планға күсә. Сөнки, тәү сиратта, милли армия ойоштороу зарураты тыуа. 1918 йылда автономия Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә генә ғәмәлгә ашырыла.

Оло Башҡортостан проектына граждандар һуғышы тамамланғас ҡына кире ҡайталар. 1921 йылда Башҡортостан хөкүмәте рәйесе Муллайән Халиҡов (тыумышы менән Өфө губернаһы Аҡтау ауылынан) автономия территорияһынан ситтә ҡалған башҡорттарҙы Оло Башҡортостанға ҡушыу тәҡдиме менән Мәскәүгә сыға. Ул Татар АССР-ына бирелгән Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәрен Башҡортостанға ҡайтарыуҙы һорай. Әммә үҙәк власть быға риза булмай. Революцияға тиклем 150 мең иҫәпләнгән Минзәлә өйәҙендәге башҡорттар 1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа, оло үкенесебеҙгә ҡаршы, тулыһынса татар тип яҙыла.

Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәренән Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштә күп кенә арҙаҡлы шәхестәр ҡатнаша. Минзәлә өйәҙенең Таҡталасыҡ ауылынан арҙаҡлы башҡорт дворяндары нәҫеленән Илдархан, Ғариф, Ғүмәр Мутиндар. Мәстей ауылынан - арҙаҡлы башҡорт дворяндары Солтановтар нәҫеленән Искәндәрбәк Солтанов, Яңы Зиәш ауылынан - Тәҡиулла Әлиев, Уразай ауылынан - Хәйҙәр Лотфуллин, Бөгөлмә өйәҙе Кисеүсат ауылынан арҙаҡлы ғалим Ризаитдин Фәхретдиновтың уландары Ғабдрахман менән Ғәбделәхәт, һәм башҡалар.

**Милләтебеҙгә ҡарата ошо һынылыш осоронда һәм, ғөмүмән, башҡа тарихи ваҡиғаларҙан һуң да ҡулланылған геноцид һәм этноцид тураһында нимәләр әйтә алаһығыҙ?**

**М. Ҡолшәрипов:** Башҡорттарҙың демография тарихы үтә лә ҡатмарлы, тотороҡһоҙ була, төрлө йоғонтоларға дусар ителә. Былар барыһы ла ҡатмарлы тарихи ваҡиғаларҙың эҙемтәһе. Башҡорт милләтенең демографик хәле тураһында һөйләгәндә ошоларҙы ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай.

XVIII быуатта башҡорттарҙың һаны кәмеүе иң тәүҙә Рәсәй батшалығы тарафынан башҡорт ихтилалдарының рәхимһеҙ баҫтырылыуы менән бәйле. Ә XIX быуат башҡорттарҙың демографик үҫеше өсөн сағыштырмаса яҡшыраҡ шарттар алып килә. Әгәр XIX быуат башында, бихисап ҡорбандар биргән төрлө ихтилалдарҙан һуң, милләттәштәребеҙ һаны күпкә кәм тороп ҡалһа, 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәһендә уларҙың һаны 1 миллион 311 мең кешегә еткәне асыҡлана. Был башҡорттарҙың 6,5 тапҡырға артҡанын аңлата.

Әммә XX быуат тарихта башҡорттар өсөн тағы ла бер ҡанлы бит булып яҙыла. Илдең башҡа төрки халыҡтарынан айырмалы, милләттәштәребеҙ һаны үҫмәй, киреһенсә, бик ҡаты юғалтыуҙар кисерә. Донъя халыҡтарының этнодемографияһы буйынса билдәле белгестәр С.И. Брук һәм В.М. Кабузан, 1917 йылда Ваҡытлы хөкүмәт үткәргән халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә таянып, ул мәлдә Рәсәйҙә башҡорттарҙың һаны 1732800 кеше тәшкил итеүен асыҡлай. Ә 1989 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса СССР-ҙа 1449157 кеше үҙен башҡорт милләтенән тип билдәләй. Был XX быуатта башҡорт милләтенең демографик үҫеш кисермәгәнлеген асыҡ күрһәтә. Ә шул уҡ ваҡытта ҡырғыҙҙар һәм төркмәндәр 10 тапҡырға, әзербайжандар - 6, үзбәктәр - 4, татар һәм ғағауздар - 3, балҡар һәм сыуаштар 2 тапҡырға арта.

Был бәләнең бер нисә сәбәбе бар. Башҡорт халҡы 1917-1921 йылдарҙағы граждандар һуғышы шарттарында үҙенә ҡарата алып барылған ҡыҙыл һәм аҡ террор һөҙөмтәһендә ҙур юғалтыуҙарға дусар була. 1920-1921 йылдарҙағы халыҡ хәрәкәттәрен ҡаты баҫтырыу, шул осорҙағы ҡот оскос аслыҡ та эҙһеҙ үтмәй. Шуға ла 1926 йылға башҡорт халҡы һан яғынан ҡырҡа кәмей. Дөрөҫөн әйткәндә, 1918-1921 йылдарҙа контрреволюцион халыҡ тип иғлан ителгән башҡорттарға ҡарата бигерәк тә Ҡыҙыл Армия һәм язалаусы чекист отрядтары тарафынан геноцид сәйәсәте алып барыла. 1929-1932 йылдарҙағы коллективлаштырыу, Сталин репрессиялары һөҙөм-



***Муллайән Халиҡов Татар АССР-ына бирелгән Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәрен Башҡортостанға ҡайтарыуҙы һорай. Әммә үҙәк власть быға риза булмай. Революцияға тиклем 150 мең иҫәпләнгән Минзәлә өйәҙендәге башҡорттар 1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа, оло үкенесебеҙгә ҡаршы, тулыһынса татар тип яҙыла. Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәренән Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштә күп кенә арҙаҡлы шәхестәр ҡатнаша. Минзәлә өйәҙенең Таҡталасыҡ ауылынан арҙаҡлы башҡорт дворяндары нәҫеленән Илдархан, Ғариф, Ғүмәр Мутиндар. Мәстей ауылынан - арҙаҡлы башҡорт дворяндары Солтановтар нәҫеленән Искәндәрбәк Солтанов, Яңы Зиәш ауылынан - Тәҡиулла Әлиев, Уразай ауылынан - Хәйҙәр Лотфуллин, Бөгөлмә өйәҙе Кисеүсат ауылынан арҙаҡлы ғалим Ризаитдин Фәхретдиновтың уландары Ғабдрахман менән Ғәбделәхәт һәм башҡалар.***

***✓ Илде губерналарға бүлеү милләт-ара низағтарҙы көсәйтергә мөмкин. Әгәр Федераль үҙәк хоҡуҡи демократик дәүләт төҙөргә теләй икән, тәрән фәнни нигеҙҙә эшләнгән милли сәйәсәткә таянырға тейеш.***



тәһендә яңы ғына ҡанат нығытып килгән башҡорт интеллигенцияһы тамырынан ҡоротола. 1930-1950 йылдарҙа башҡорттоң 7 меңгә яҡын иң белемле, зыялы шәхестәре репрессиялана. Бөйөк Ватан һуғышында СССР-ҙа йәшәүсе бөтә халыҡтар ҙа ҙур юғалтыуҙар кисерә, башҡорттарҙы ла был афәт урап үтмәй. Тап башҡорттар үҙҙәренең милли ғәскәрен - Башҡорт кавалерия дивизияһын булдыра. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк: башта дивизия 80 процент башҡорт милләтенән формалашһа, һуғыш аҙағында улар тере ҡалған һалдаттарҙың ни бары 10 процентын ғына тәшкил итә.

Этноцид - геноцидтан айырмалы рәүештә, халыҡтың физик юҡҡа сығарылыуын түгел, ә этнос булараҡ юҡ итеүгә йүнәлтелеүен маҡсат итеп ҡуйған сәйәсәт. Тап ул халыҡтарҙы милләт булараҡ бөтөрөп һәм уның нигеҙендә коммунизм төҙөргә ынтылған ил етәкселегенең төп сәйәси ҡоралына әйләнә. Ул XX быуаттың 20-се

# БЕҘГӘ БИРМӘГӘНДӘР,

## яулап алғанбыҙ!

йылдарынан үткәрелә башлай, ә һуғыштан һуңғы йылдарҙа көсәйә генә. Был йылдарҙа башҡорттарҙың милләт булараҡ бөтәсәге тураһында уй халыҡ аңына көсләп тағыла, уның милли мираҫы - әҙәбиәт, мәҙәниәт ҡомартҡылары, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар иҫкелек ҡалдығы тип кире ҡағыла. Шулай итеп, башҡорттар үҙ тарихын, үҙаның юғалтыуға дусар ителә һәм уларҙың ырыуһыҙ-туғанһыҙ маңҡортҡа әйләнеү хәүефе тыуа.

XX быуаттың 1960-1980 йылдарында этноцид сәйәсәте иң юғары нөктәһенә етә, тип билдәләргә мөмкин. Милли мәктәптәр ябыла, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, башҡорт халҡы тарихы һәм мәҙәниәте кеүек дәрестәр программанан алып ташлана. Туған тамырҙарын онотҡан, башҡа ҡиммәттәрҙе үҙ иткән яңы быуын үҫтереү бурысы атҡарыла башлай.

Тағы ла шул: тап ошо йылдарҙа башҡорттар башҡа милләттәрҙең һанын "тулыландыра", йәғни ассимиляцияға дусар ителә. Этноцид сәйәсәте һөҙөмтәһендә XX быуат дауамында республиканың башҡорт халҡы, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ өлөшө яйлап туған телен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын онота, башҡа милләттәр, бигерәк тә татарҙар иҫәбенә индерелә. Мәҫәлән, 1939 йылда, 1926 йыл менән сағыштырғанда, татарҙар һаны 400 меңдән 777 меңгә тиклем, йәғни 377 мең кешегә арта. Ә башҡорттар ни бары 129 мең кешегә үҫеш кисерә. Сөнки тап ошо осорҙан башлап, йәнәһе лә, башҡорт телендә әсбаптар һәм башҡорт теле уҡытыусылары етмәгәнлектән, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ райондарҙа башҡорт мәктәптәре күпләп татар телендә уҡытыуға күсерелә.

Халыҡ мәғарифы комиссариатының статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, 1923-1924 йылдарҙа Бөрө кантонында 131 башҡорт, 10 татар, 112 урыҫ, 47 мари мәктәбе эшләй, унда 6959 (йәғни 40,1 процент) башҡорт, 488 татар (2,8 процент), 7240 урыҫ (41 процент) балаһы белем ала. Ә 30-сы йылдар аҙағына бында ниңәлер бер башҡорт мәктәбе лә ҡалмай, улар бөтәһе лә татар телендә уҡытыуға күсерелә. Халыҡ мәғарифы комиссариатының ошо уҡ мәғлүмәттәре буйынса, 1923-1924 йылдарҙа Бәләбәй кантонында - 68, Өфө кантонында 51 башҡорт мәктәбе була, улар ҙа һуңынан юҡ ителә.

Ошондай уҡ сәйәсәт 70-се йылдарҙа ла дауам итә, был турала башҡорт һәм татар мәктәптәре һандарын сағыштырыу ҙа етә. Мәҫәлән, 1938-1968 йылдарҙа татар мәктәптәре 1085-тән 1174-кә етә, ә башҡорт мәктәптәре һаны 1256-нан 785-кә тиклем кәмей. Шулай итеп, башҡорт мәктәптәрен күпләп ябыу, уларҙа татар телендә белем биреү үҫеп килгән быуындың үҙ тамырҙарын онотоуына килтерә. 1979 йылдағы халыҡ иҫәбен алыуҙа башҡорттарҙың 32 процентының татар телен туған теле итеп күрһәтеүенең сәбәбен ошонан аңларға мөмкин.

***Халыҡ мәғарифы комиссариатының статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, 1923-1924 йылдарҙа Бөрө кантонында 131 башҡорт, 10 татар, 112 урыҫ, 47 мари мәктәбе эшләй, унда 6959 (йәғни 40,1 процент) башҡорт, 488 татар (2,8 процент), 7240 урыҫ (41 процент) балаһы белем ала. Ә 30-сы йылдар аҙағына бында ниңәлер бер башҡорт мәктәбе лә ҡалмай, улар бөтәһе лә татар телендә уҡытыуға күсерелә. Халыҡ мәғарифы комиссариатының ошо уҡ мәғлүмәттәре буйынса, 1923-1924 йылдарҙа Бәләбәй кантонында - 68, Өфө кантонында 51 башҡорт мәктәбе була, улар ҙа һуңынан юҡ ителә.***

▸ **Үрҙә башҡорттарҙағы "ҡоролтай" төшөнсәһен асыҡлап киттек, ә "автономия" тигәнде улар нисек ҡабул иткән?**

**Р. Зәйтүнов:** Башҡорттар, башҡорт лидерҙары "автономия" төшөнсәһен бик киң мәғәнәлә аңлаған. Ул иң беренсе "аҫаба"тигән һүҙҙән, төшөнсәнән башланғыс алған. XVI быуаттың уртаһында Рәсәйгә ҡушылғандан һуң Башҡортостан шул уҡ автономияны тәшкил итә. Унда Рәсәй менән мөнәсәбәттәр бары яһаҡ түләү менән генә сикләнә. 1865 йылға, кантон системаһы юҡҡа сыҡҡанға саҡлы, башҡорт йәмғиәтендә автономия элементтары һаҡланған була. Йәғни халыҡ үҙ законлары менән йәшәй. 1865 йылдан һуң башҡорттар төрлө реформаларға дусар ителә. Әммә улар автономиялы йәмғиәтте хәтерендә һаҡлаған була әле. Башҡорт Өлкә Шураһының фарманында ла шулай тиелә: халыҡтың хәтерендә әле үҙаллылыҡ аңы һаҡланған. Шуға күрә лә, 1917 йылда автономия тураһында һүҙ күтәрелгәс, башҡорттар араһында "Ул нимә?" тигән һорау булмай. Хатта яңы төҙөлгән башҡорт ғәскәрен дә улар автономияның бер элементы булараҡ ҡабул итә.

Тимәк, автономияны ата-бабаларыбыҙ иҡтисади күҙаллауҙарҙан, иҡтисади ихтыяжларҙан сығып яулаған. Һәм әлеге аныҡ һорауҙа ер мәсьәләһе иң алғы планға тора. Улар ерҙәрҙе һаҡлап ҡалһаҡ, йәшәйәсәкбеҙ икәнде аңлаған. Һәр бер сәйәси, ижтимағи хәрәкәт иҡтисади барлыҡты тормошҡа ашырыу ул. 1917 йылда, Романовтар властан киткәндән һуң, аҫабалыҡты берәү ҙә гарантияламай. Шул осорҙа халыҡтан килгән иң беренсе импульс - ерҙәрҙе һаҡлап алып ҡалыу. XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда ер мәсьәләһе буйынса "алтын лихорадка" була. Ерҙәрҙе тартып алалар, халыҡтың бар булмышын үҙгәртәләр. Элек иркенләп мал көтһәләр, күсенеп, йәйләп-ҡышлап йөрөй алһалар, шул мәлдәрҙә ерҙәр бүленеп, баярҙарға бирелеп, заводтар төҙөлөп, малсылыҡ системаһы юҡҡа сыға. Һәм 1917 йылда тағы ла ошондай ҡурҡыныс янаған мәлдә зыялыларыбыҙ был иҡтисади афәтте дөрөҫ баһалап, төбәктәрҙә яҡлау өсөн автономия төҙөүгә ынтыла. Шунлыҡтан, ҡабатлап әйтәм, әлеге төрлө сайттарҙа яҙылған ғәйеп ташлауҙар, сәйәси йөй эҙләүҙәр - буш һүҙ. Автономия яулауҙың төп маҡсаты - иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеү булған.

Тағы ла бер фактор: автономияны эре ер биләүсе башҡорттар ҙа яҡлап сыға. Беренсе донъя һуғышы Рәсәйҙе иҡтисади, сәйәси көрсөккә килтерә. Ихтилал күтәрелә. Ваҡытлы хөкүмәттән артыҡ файҙа булмай. Унан большевиктар власҡа килә. Улар төрлө декреттар ҡабул итә. Халыҡтар быны эләктереп ала. Көньяҡ Уралда иһә был хәрәкәт башҡаларҙан айырмалы рәүештә икенсе юҫыҡтан китә. Бында ер хаҡынан да юғарыраҡ төшөнсә булмай.

Лидерҙар мәсьәләһенә килгәндә, халыҡтың артында ана шул эре ер хужалары, ер биләүселәр тора. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Граждандар һуғышы тоҡанғас, байҙарҙы ҡыра башлайҙар. Был Башҡорт хәрәкәте лидерҙарын таянысһыҙ ҡалдыра. Һуғыш осоронда ғына ла Башҡортостан туғыҙ тапҡыр аҡтарҙан - ҡыҙылдарға, ҡыҙылдарҙан аҡтар ҡулына күсә. Унан ҡыҙылдарҙың енере аңлашылғас, унайлы мәлдә тотоп, Башҡорт хәрәкәте Советтар менән килешеү төҙөй.

▸ **Йыш үҙгәреп торған ҡатмарлы заманда, берсә аҡтар, берсә ҡыҙылдар яғына сығырға тура килгәндә, Башҡорт хөкүмәтенең позицияһын нисек анализлайһығыҙ?**

**М. Ҡолшәрипов:** Большевиктарҙың Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренә ҡаршы алып барған репрессив сәйәсәте башҡорт халҡының күпселегендә Совет власына ҡарата нәфрәт уята. 1918 йылдың апрель башында Ырымбур ҡалаһына Әмир Ҡарамышев төҙөгән башҡорт хәрби отряды һәм ҡазаҡтар һөжүм итеүенән файҙаланып, Әхмәтзәки Вәлиди һәм башҡа Башҡорт хөкүмәте ағзалары төрмәнән сығарыла. 1918 йылдың май аҙағында, чех корпусы һәм Һамар Комучы армияһының ҡораллы сығыштарынан һуң, башҡорт хәрәкәте лидерҙары Силәбе ҡалаһына килеп урынлашып, үҙ эшмәкәрлеген яңынан башлай. Хөкүмәт һәм Үҙәк шураны тергеҙәләр. Әхмәтзәки Вәлиди етәкләгән Башҡорт хәрби шураһы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә, башҡорт ир-егеттәренең илһөйәрлек рухына таянып, ике дивизиянан торған милли ғәскәр төҙөүгә өлгәшә.

Шуны билдәләп үтергә кәрәк: Башҡорт хөкүмәте, аҡтар яғына күскәндән һуң, башҡорт ҡоролтайҙарының ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу буйынса әүҙем эшкә тотона. Тиҙҙән урындарҙа Башҡорт хөкүмәтенә буйһонған идаралыҡ системаһы барлыҡҡа килә. Урындарҙағы был башҡарма һәм суд властары ирекле отрядтарҙан, милициянан торған үҙ ҡораллы көстәренә таянып эш итә. Әлбиттә, һуғыш шарттарында власть йыш үҙгәреп торған. Әммә шундай ҡыйынлыҡтар булыуына ҡарамаҫтан, Башҡорт хөкүмәте кантондарҙы һәм улыстарҙы мөмкин тиклем контролдә тотоу буйынса маҡсатлы һәм эҙмә-эҙлекле сәйәсәт алып барған. Шул уҡ ваҡытта аҡтар һүҙҙә (Һамарҙағы Комуч, Себер хөкүмәте) Башҡорт автономияһын таныған кеүек булһа ла, ғәмәлдә нисек тә уның хоҡуҡтарын сикләргә тырыша, Башҡорт автономияһының эске эштәренә ҡыҫыла.



Шулай ҙа Башҡорт хөкүмәте үҙ ниәтендә ныҡ тора һәм, мәҫәлән, Колчактың билдәле түңкәрелешенән һуң да (1918 йыл, 18 ноябрь) үҙидара системаһын юҡҡа сығарыуға юл ҡуймай, милли ғәскәрҙәрҙе таратмай.

1918 йылдың 20 августында 4547-се бойороҡ менән Башҡорт автономияһының һәм милли ғәскәрҙәренең үҙаллылығын белдереп торған өс төҫлө милли байраҡ ҡабул ителә. Тағы шуныһы мөһим: башҡорт хәрбиҙәренең үҙ хәрби формаһы була (күк мундир, ярым ай һәм йондоҙҙар төшөрөлгән шевронлар һ.б.). Аҙаҡтан да, Колчак түңкәрелешенән һуң, башҡорт корпусының Ҡыҙыл Армия һәм Совет власы яғына сығыуына ҡағылышлы һөйләшеүҙәр тик Башҡорт хөкүмәте исеменән алып барыла. Башҡорт Совет автономияһының проектын да шул уҡ Хөкүмәт әҙерләй. Ул проект 1919 йылдың 20 мартында төҙөлгән "Килешеү"ҙең нигеҙен тәшкил итә.

Бөгөн ҡайһы бер сәйәсмәндәр фекеренсә, илдең милли-территориаль күрһәткес буйынса бүленеүе, имеш, дәүләттең берҙәмлегенә һәм бөтөнлөгөнә ҡурҡыныс менән янай. Киреһенсә, милли республикаларҙы бөтөрөү, йәғни илде тик губерналарға бүлеү милләт-ара низағтарҙы көсәйтергә мөмкин. Әгәр Федераль үҙәк хоҡуҡи демократик дәүләт төҙөргә теләй икән, федерализм принциптарын яҡлаған, тәрән фәнни нигеҙҙә эшләнгән милли сәйәсәткә таянырға тейеш.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**яҙып алды.**

*✓ Автобусҡа ултырғас, атайым моңһоу ғына йылмайып, ҡул болғай. Уның да күҙендә йәш тамсылары күрәм... Ила, әйҙә, ила, тип үсәйем, үҙең ташлап киткәс, ила! Һиңә шул кәрәк, һатлыҡйән!*





Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

# Беҙ алһыуҙары ғына...

(Хикәйә)

Арт яҡ ҡапҡанан йәтеш кәүҙәле ҡатын килеп сыҡты. Ҡулында һөтлө биҙрә. Өҫтөндә бысраҡ ҡына халат. "Һе, был һәпрәһе кем икән? Тегенең яңы бисәһеме?! Әсәйемде ошо ҡараҫҡыға алыштырһа, алйот булыр!"

Бисәкәй тәүҙә мине абайламай. Һөтөн тотоп өйгә инеп китте. Ишектән күренеп тора - биҙрәһен ултыртты. Ҡулын яҡшылап тороп һабынлап йыуҙы. Бысраҡ халатын сисҡәйне, күк кенә сәскәле матур күлдәктә икән! Эй, алйотмон да инде! Ниндәй матур булһын инде. Вот әсәйемдең күлдәктәре матур исмаһам! Быныҡы прастуй ғына! Әсәйемдең эшкә кейгән күлдәктәрен күрһәгеҙ! Әй, һеҙ уның ҡайҙа эшләгәнен белмәйһегеҙ бит әле!

Әсәйем минең дирижер! Эйе, әйтеп тә булмай әле ҡапылда ғына. Оркестрҙы уйната, хорҙы йырлата! Уның таяғы тылсымлы, ти торғайны атайым. Шуға бөтәһе лә уны тыңлай. Ә ништәп әтеү үҙе тыңламай беҙҙе таштап сығып китте икән? Ҡайтҡас, әйтергә кәрәк әле әсәйгә! Тыңлатһын атайҙы! Ҡайтһын өйгә!

Күк сәскәле күлдәкле бисәкәй тышҡа сыҡты. Атайымды күрергә өмөтләнгән кеше мине күреп, асҡан ауыҙын яба алмай торҙо. Мин көлдөм дә ебәрҙем! Хәтәр!

Шул саҡ ҡапҡала атайым күренде.

- Ни, Мөршиҙә, бына миңә ҡыҙым ҡунаҡҡа килгән. Ҡыҙым, кил әле бында, Мөршиҙә апайың менән күреш! - тине атайым әллә ниндәй ярамһаҡланған тауыш менән. Күңелдә ытырғаныс тыуҙы.

- Нет! - Үҙем дә һиҙмәҫтән урыҫсалап тороп яуаплап, ҡулын һуҙып килгән апайҙан ҡасып, атайыма һыйындым. - Не буду!

Апай ыуаланды-ыуаланды ла өйгә инеп китте. Атайым элеккесә яйлап-майлап йөрөмәне, йүгерә-атлай атын туғарҙы, уныһын кәртәгә индереп бәйләгәс, мине етәкләп өйгә индерҙе. Соланда ла йәһәтләп йыуынды. Элеккесә ыңһарлап, ышҡынып торманы. Мин атайымды танымаңым.

Беҙҙе өйҙә тәмле аш еҫе ҡаршы алды. Тәмле теейемсе! Ашап ҡарамайса нишләп улайтамдыр! Тәмһеҙҙер әле. Әсәйем кеүек тәмле итеп, теленде йоторлоҡ итеп бешерә лә белмәйҙер әле!

Ҡаршыма туп-туп атлап бер малай килде.

- Улым, апайың менән күреш. "Сәләм!" тигән! Был Тамсыгөл апайың! Тамсыгөл, ә был ҡустың Морат.

Миңә һуҙылған бәләкәс кенә йомро усты ҡыҫып күрештем тиһегеҙме! Булмай торһон!

- Нет, это не мой брат! Мой брат дома! Его зовут Марат! - тинем мин еңмешләнеп. Малай ҡуймай, минең ниңә асыуланғанды аңламай, һаман ҡулын һуҙып маташа. - Уйди! - Бар көсөмә тененең ҡулын этеп ебәрҙем, саҡ ҡолап китмәне.

- Атаҡ, Йәнтимер, ҡыҙың башҡортса белмәйме әллә? - Аш һалып торған ҡатын ихлас аптыраны. Шунан ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Сылтыр ғына көлә үҙе. Атайым да миңә төбәлгәс, тишә яҙып ҡараным. Ыҫта, башҡортса һөйләшә алманым да ҡуйҙымсы!

Атай яурынымдан ҡосоп, өҫтәл янына алып килде.

- Аңлай ул, һөйләшер. Бына ят кешеләргә өйрәнеп кенә алһын әле. Ивет, ҡыҙым!

Мин яурынымды уның ҡулынан ялт тартып алдым. Һөйләшмәйем!

Ашты ҡыҫтай-ҡыҫтай ашатырға тырышһалар ҙа, саҡ ҡына ҡаптым. Вапшы ҡапмаҫҡа ине, асыҡтырған. Танауҙы ҡытыҡлап тик тора ит еҫе, һалма еҫе. Шуға ғына... Былай булһа, әсәйем бешермәгән нәмәне ашап та тормаҫ инем...

Атайымдың бисәһе миңә текләп-текләп ҡарай. Ҡаш аҫтынан һөҙөп ҡарап ултыра биргәс, түҙмәнем, бар көсөмә ауыҙымды бәлшәйттем. Ҡыҙарып китте теге! Ялт иттереп атайыма күҙ һалды ла, өндәшмәне. Миңә лә тексәйеүҙән туҡтаны зату.

Оҙон кис тә үтте. Ҡасан йоҡларға ятабыҙ инде, тип, сәсем ағара яҙҙы. Атайымды ҡыҫып ҡосаҡлап, еҫкәп кенә ятыр инем!

Ҡапыл аптыранып өйгә күҙ йүгерттем. Өй бәләкәс кенә бер бүлмәле. Кухня яғы ғына таҡта менән әҙерәк бүленгән. Был яғында бер оло карауат - был икәү өсөн инде. Бәләкәс кенәһе теге малайҙыҡы. (Ҡустым тип уйлағы килмәй). Ә мин ҡайҙа ятам икән? Ә-ә, өҫтәл артында диван башы күренә. Мин шунда ятырмын атайым менән. Атайым... Һөйләшеп кенә ятырбыҙ ҙа, мин уны иртәгә өйгә үҙебеҙгә ҡайтырға өгөтләрмен, күндерермен. Минең һүҙемде йыҡмай бит ул.

Малай мыжый башланы. Былар телевизор текләп ултырған ерҙән, икәүләп тороп урын йәйергә керештеләр. Мин телевизорға боролоп та ҡараманым. Бәләкәй генә. Әллә черно-белый инде. Беҙҙә цветной, үҙе ғәләмт ҙур. Юҡ, алдашырға яратмаған күңелем төҙәтә һала - ну ғәләмәт үк булмаһа ла, быларҙыҡынан ҙур инде.

- Тамсыгөл ҡыҙым, һин диванда ятырһың, - ти атай үҙ ҡулы менән йәймә түшәп. Ҡалай ҡыҙыҡ! Атайҙар ҙа урын һала икән! Өйҙә бит гел әсәйем түшәй ине, һылап, матурлап. Унда беҙҙең өй хәтәр ҙур - биш-алты бүлмә. Әсәйҙәрҙең, минең, ҡустымдың йоҡо бүлмәләре, оло ҡунаҡ залы, унан кухня. Унан прихожка. Хатта әсәйемдең кейемдәрен элергә айырым бәләкәй генә гардеробныйы ла бар. (Гардеробный тигәс, бер ҡыҙыҡ иҫкә төштө. Ул бүлмәне ҡәртәсем күрмәгән булған икән. Бер килгәнендә атай нимәгәлер асып ебәргәйне, әсәйҙең күлдәктәрен, ике-өс ҡат ширлек тулып ултырған төрлө төҫтәге, төрлө фасондағы аяҡ кейемдәрен күреп, ҡәртәсем ултыра төштө. "Йәнтимер, килен ҡырҡаяҡ түгелдер ҙә ул! Бынауынсама туфли-муфлийҙы ул ҡасан кейеп туҙҙыра! Атаҡ-атаҡ, шунан өйҙә ниндәй аҡса торһон!", - тип саҡ иҫенә килде. Шунан бирле ул бүлмәне ҡәртәсемә асып күрһәтмәнек.)

Ә быларҙың бөтәһенә бер бүлмә.

- Пап, я с тобой хочу спать! - тинем көйһөҙләнеп. Атайым өндәшмәй. Теге бисә ауыҙын асты:

- Ҙур ҡыҙға атайҙар менән йоҡларға ярамай. Килешмәй.

Ә мин уны аңлағанымды һиҙҙермәйем. Килешмәйҙер, атайҙары көн дә эргәһендә булһа. Ә миңә киләшә! Миңә ярай! Мин бит әллә ҡасандан күргәнем юҡ аны. -Һа-ғындым!

Атайым минең күҙ ҡарашымдан аңлай. Мин урынға ятҡас, эргәмә килеп һуҙыла.

- Ҡана ҡыҙымды ҡосаҡлап, ул йоҡлағансы ғына ятып торайым. Йәме?

- Йә, - тейем шым ғына, тегеһе ишетеп ҡалмаһын! Атаҡ, атайым эргәмдә булһа башҡортса беләм дәһә!

- Атай, иртәгә минең менән ҡайтаңмы?

- Юҡ, ҡыҙым, ҡайта алмайым. Минең бит икенсе ғаиләм бар. Улым.

- Тегендә лә улың бар. Унда ла ғаиләң бар. Ә был... Был ғаилә түгел. - Нисек әсерәк һүҙ әйтергә белмәй ыуаланам. - Был, - әһә, хәтергә төштө бит әй, - Ыстырам!

Атайым көләмһерәй. Әммә көләмһерәүе йәл. Күңелһеҙ.

- Шулай килеп сыҡты инде, ҡыҙым. Берәй заман аңларһың. Ғәфү итерһең, йәме! - ул элеккесә сәсемдән еҫкәп, башымды һыйпай, рәхәт иттереп кенә еҫкәй. Сикәмде ышҡып ала. Бәй, һаҡал-мыйығы ҡытыҡлайсы! Элек эйәге шып-шыма ине. Әллә ҡырынғысы ла юҡ инде... Миңә атайым шул ҡәҙәр йәл булып китә. Бахырҡасым! Ҙур матур өйҙән, сип-сибәр әсәйемдән, оло машинанан һуң ошо бәләкәс кенәй өйҙә, яман ғына албаҫты менән йәшәп ят инде. Ат егеп тороп! Күҙгә йәш төйөлә. Мин йән асыуыма тешемде ҡыҫам һәм... йәнә юҡҡа сығам...

Шыбыр-шыбыр һөйләшкәнгә уянам. Тегеләр һөйләшә, дөрөҫөрәге албаҫтыһы шырҡ-шырҡ көлә, шыбырҙап нимәлер әйтә.

- Шым, - тип тыя атай, - Балаларҙы уятаһың бит! Йоҡла! Тыныс йоҡо!

- Ну, ҡыҙыҡ та инде! - Тағы шырҡылдай. Нимәһе ҡыҙыҡтыр! Төн убыры! - Йә инде, Йәнтимер, берҙе генә үпәс ит тә, шунһыҙ йоҡлай алмайым бит.

Суп-суп үбештеләр. Шул үбешкән арала ла әллә нисә көлдө суҡынған мәрйәһе. Ҡәртәсәйемдең мине орошҡандағы һүҙе әллә ҡайҙан килде уйға?! Былай гел көлөп торған кеше лә була икән? Кискеһен дә көлөп тик йөрөнө, иҫәр һымаҡ. Атайым да шуға ҡушылған була бит әле!

... Иртәнге автобусҡа сыҡтыҡ. Икебеҙгә лә ҡыйын. Шуға шым ғына барабыҙ. Мин атайымдың ҡулын ҡыҫып тотҡанмын. Автобус ишеге төбөнә еткәс, ҡапыл ғына:

- Нисек унда Ләйләгөләм? - тип һорап ҡуя. Йылы итеп, үҙ итеп һорай. Әммә минең үҙһүҙлегем хәтеремдә кискеһенге суп-супты һөйрәп сығара.

- Шәп! Әсәйем шәп! Хатта... хатта кейәүгә сыҡты! - быныһы ауыҙымдан нисек ысҡынғандыр, үҙем дә һиҙмәй ҡалам. Атайыма үс иткем килә. Әсәйем дә суп-суп үбешә тип уйлаһын!

Атайым миңә һынап ҡарай, минең алдашмағанды белгәнгә шулай ҡарауы. Эй, минең алдаша белмәгән күҙҙәрем һатҡандыр күрәһең - еңел һулап, йылмайып ҡуя.

- Исеме кем?

Был тиклемен уйлап сығарып алдарға телем әйләнмәй. Аҫҡа эйеләм.

- Һин уға кем тип өндәшәһең һуң?

- Атай тип өндәшәм инде! Атай, атаҡайым тип! - Мин атайымдың киң күкрәгенә ҡапланам. Күкрәгенә лә түгел инде, эсенән генәмен!

-Ҡыҙыҡайымды минең, Тамсыгөләмдө! Шуға ла яратам бит мин һине!

Атайҙан бер ҙә ат еҫе сыҡмайсы, танауға мазут, сәләркә тәме бәрелә.

- Атай, һинән һаман сәләркә, бензин еҫе сығасы? -Ныҡ итеп еҫкәйем, танһыҡ еҫте булһа ла үҙем менән алып ҡайтып киткем килә.

- Сыға инде, шофер булғас.

- Һин шофермы ни һаман? Ә машинаң ҡайҙа? Ә ат?

- Машина гаражда. Ә ат ул беҙҙең үҙебеҙҙеке. Һыйыр, һарыҡтар кеүек.

Ә-ә-ә, мин еңел һулап ҡуям, ярай әле шофер икән. Әтеү мин гел атта йөрөйҙөр тимен...

Ауылды сығып киткәс, атайымдың албаҫтыһы көсләп пакетыма һалған күстәнәсте алып ҡарайым - матур ғына тышлы кәнфиттәр, әфлисун, алмалар. Шытырҙатып тешләп ашағы килеү тойғоһон еңеп, ауыҙ һыуын йотоп, төйөнсөктө ултырғыс аҫтына тығам. Тәҙрә аша ғына ташлар инем, ҡәртәсем тыя: ризыҡты ташларға ярамай, гонаһ була ти. Шул һүҙҙән ҡурҡып ҡына уны ташламайым. Миңә гонаһ кәрәкмәй. Гонаһ ул әсәйҙе илата торған ҡайғы. Ишеткәнем бар: "Ни гонаһтарым өсөн миңә был ғазаптар?!"- тип илағанын... Гонаһ бик ҡурҡыныстыр. Әсәй һынлы әсәй илағас...

Автобусҡа ултырғас, атайым моңһоу ғына йылмайып, ҡул болғай. Уның да күҙендә йәш тамсылары күрәм... Ила, әйҙә, ила, тип үсәйем, үҙең ташлап киткәс, ила! Һиңә шул кәрәк, һатлыҡйән!

...Әсәйем мине автобус эсенә инерҙәй булып ҡаршы ала. Күҙҙәренән үк уның борсолоуын, ниндәй хәбәр әйтеремде көтөүен аңлайым. Тик аңламамышҡа һалышам.

- Шунан ? Нисек? - ти ул ҡарашымды тотоп алырға тырышып. Ҡарамайым.

Бер аҙ барғас ҡына, сандалийҙарым менән саңды туҙыратып, әйтеп ҡуям:

- Яп-яман бер нәмә! Нимәһенә ҡыҙыҡты икән?!

Күҙ ҡырыйым менән генә әсәйемде күҙәтәм. Йөҙө асылғандай булды түгелме? Шулай ҙа һыр бирмәйем - икеһе лә ғәйепле: тегеһе бер ямаҡайға әүрәне, быныһы риза булып сығарып ебәрҙе. Китмә, тип илаһа, беҙҙе илатһа була бит инде! Юҡ! Эрекәс!

- Һин дә шәп! - тейем үсәп, - Улар кис буйы үпәс итешәләр! Кискеһен йоҡлағанда атайҙы үпәс итһәң, китмәҫ ине! Вәт!

(Дауамы бар).

✓ *Әммә башҡорт бейеүе ул сәләмәтлекте нығытыу сараһынан бигерәк, рухты күтәреү ысулы икәнен аңларға кәрәк. Әлбиттә, бейегән кешенең атлап йөрөүҙәре лә башҡа. Атлауыбыҙға ҡарап, ана, бейеүселәр китеп бара, ти торғайнылар.*

*ИЖАДХАНА*

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ...

## башҡорт балаһын үҙ асылына ҡайтара ала



**Учалы төбәге йырсылары менән генә түгел, бейеүселәре менән дә дан тота. Башҡорт бейеүенә бында айырыуса һаҡсыл ҡараш йәшәй, тап бында ғына һәр ауылда балалар бейеү ансамблдәре бар. "Ижадхана"ның бөгөнгө геройы ла, тап ошондай мөхиттә тыуып-үҫеүем менән бәхетлемен, ти. Өфө ҡалаһының "Сығанаҡ" балалар ижады үҙәге педагогы, "Толпар" бейеү ансамбле етәксеһе, йәш хореограф Денис Рауил улы ҒАТАУЛЛИН менән башҡорт бейеүе, балалар менән шөғөлләнеүҙең үҙенсәлектәре тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

### Бөтәһе лә бейеүсе

Мин башланғыс класта уҡып йөрөгәндә сығышы менән үҙе лә ошо ауылдан булған бейеүсе Айбулат Әһлиев ауыл хакимиәте башлығы, мәктәп директоры кәңәше һәм ярҙамы менән түңәрәк асып ебәрҙе. Ғөмүмән, ҡыҙыҡ ауыл ул Учалы районының Батталы. Беҙҙә халыҡ бик сәмсел, тырыш, донъя көтөүгә ифрат шәптәр. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ - беҙҙә уҡыусылар йә бейеүсе, йә физкультура уҡытыусыһы һөнәрен күберәк һайлай. Спортҡа ылығыуҙың сәбәбе нимәләлер, аңлап булмай, 9 йыллыҡ мәктәптең хатта спорт залы ла юҡ. Физкультура дәрестәре яҙын-көҙөн генә түгел, ҡышын да саф һауала үтә. Бейеүсегә килгәндә иһә, мин уҡығанда ла, әле лә мәктәптә нисә уҡыусы бар, уларҙың барыһы ла "Осҡон" исемле ошо ансамблдә шөғөлләнә. Бик яратып йөрөнөк беҙ унда. Исемен дә үҙебеҙ уйлаштыҡ, бындай яуаплы эшкә беҙҙе лә йәлеп иттеләр. Һаман иҫләйем, икенсе сменала уҡыйым, дәрес бөткәс, өйгә ҡайтып, портфелде ташлайым да, ситектәрҙе эләктереп, сығып та йүгерәм. Төнгө 12-гә тиклем шөғөлләнгән мәлдәр йыш була ине. Әсәйҙәр башта бик ҡыуанды, тик уҡыуҙа өлгөрмәй башлаусыларға һуңынан яратҡан шөғөлдәрен дауам итеү өсөн күп тырышлыҡ кәрәк булды. Башлыса Фәйзи Ғәскәровтың бейеүҙәрен өйрәндек. Классик нигеҙҙе белһәң, аҙаҡтан еңел була икәнен хәҙер мин, педагог булараҡ, яҡшы аңлайым.

### Уҡытыусылыҡ та яҡын

Ансамблдә бейеп йөрөһәм дә, ҡурайсы булырға хыяллана инем. Ҡурайға өйрәтеүсе юҡ, практикаға килгән бер студенттан һыҙғыртырға өйрәнеп ҡалған булдым. Учалы сәнғәт колледжына ла ҡурай класына имтихан биреп ҡараным, тәбиғи, үтмәнем. Әсәй, СПТУ-ға бирәм, тип янай, мин эстән генә, киләһе йыл тағы килеп ҡарайым, тигән ниәтте нығытам. Шунда колледжда бейеү буйынса ҡалырға тәҡдим иттеләр. Колледждың "Ҡойон" ансамблендә бейенек, 3-сө курста ярты йыл "Ләйсән" ансамблендә эшләп алдым. Кемдәрҙер Учалы филармонияһы ансамблендә бейене. Уҡып бөткәс, һөнәремде үҙһенмәй, башта Стәрлетамаҡтың физкультура техникумын, аҙаҡ институтын тамамланым. Әрмегә барып ҡайтҡандан һуң Озерный ауылына саҡырҙылар. Мәктәп директоры ярҙамында "Оҙонгүл" тигән балалар ансамбле булдырып, эшләп алдым. Әрменән һуң булғас, дәрестәрҙә әрмеләге кеүек дисциплина талап итәм. Ғөмүмән, ҡайҙа ғына эшләһәң дә, тәртип юҡ икән, эшеңдең рәте булмаясаҡ, тип уйлайым. Балаларҙың да теләге көслө ине, күҙҙәре янып тора. Унан һуң Әбйәлил районы Ташбулат ауылында, Учалы районы Килмәк ауылында, Ауырғазы районында эшләп алдым. Башлап, ташлап китмәнем, "өлгөлө" тигән исемгә лайыҡ булғансы эшләнем.

### Өфөнө лә данларбыҙ әле!

Райондарҙа балалар ансамблдәре булһа ла, Өфө әле был йәһәттән артта. Шуға ла Өфө мине гел үҙенә тартып торҙо. Әлбиттә, баш ҡалаға яҡыныраҡ булған һайын, халыҡ бейеүе лә үҙгәрә төшә. Мәҫәлән, учалылар, әбйәлилдәр, баймаҡтар таҙа башҡорт хәрәкәттәре менән бейей. Тыпырлатыу уларҙа аҫта, таҙа. Өфө яғында башҡорт бейеүен башҡа халыҡ бейеүҙәре менән ҡушып, гибридлаштырып бөткәндәр. Бында күберәк һикереп, еңелсә итеп, өҫтән бейейҙәр. Халыҡсанлыҡ юғала.

Икенсе йыл балалар ижады үҙәгендә эшләйем, ул 2-се Башҡорт лицейы эргәһендә, шуға бейеү түңәрәгенә ошо уҡыу йортоноң уҡыусылары йөрөй. Бөгөн атаәсәләр балаларын артыҡ иркәләтеп, эш ҡушмайынса, халыҡ әйтмешләй, муйынын һуҙып үҫтерә. Хеҙмәт тәрбиәһенең ни тиклем мөһим икәнен белһә икән улар. Бейеү өсөн дә көс-ҡеүәт кәрәк. Ауыл балаларын тыңлатыуы рәхәтерәк, улар тыйнаҡтар, тырыштар. Ҡала балалары менән эшләүе еңел түгел, саҡ ҡына физик ауырлыҡты ла, ҡатыраҡ һүҙҙе лә, ҡараштың ла күтәрә алмайҙар. Сағыштырам да, ауылдыҡылар дәртлерәк тә, дарманлыраҡ та тип уйлайым. Ҡалала иһә, балаһының бейеү түңәрәгенә йөрөүе күберәк уның ата-әсәһенә кәрәк. Буйһындары төҙ булһын, һаулығын нығытһын, тип килтерәләр балаларҙы.

### Рухты күтәрә

Әммә башҡорт бейеүе ул сәләмәтлекте нығытыу сараһынан бигерәк, рухты күтәреү ысулы икәнен аңларға кәрәк. Әлбиттә, бейегән кешенең атлап йөрөүҙәре лә башҡа. Учалы сәнғәт колледжында уҡығанда бөтәһе бер ятаҡта йәшәй бит инде. Атлауыбыҙға ҡарап, ана, бейеүселәр китеп бара, ти торғайнылар. Шулай уҡ бөтөн милләт балаһына ла башҡорт бейеүен бейергә өйрәтеп була, тик башҡорттоң ул ҡанына һалынған. Шуға ла ауыл балаһына ауыр ғына хәрәкәтте бер күрһәтһәң, ул шуны ҡабатлай аласаҡ. Ҡалала йәшәп, икенсе-өсөнсө быуын ҡала башҡорто булған бала бер аҙ тырышһа, тыпырлауҙар уның аңын барыбер уятасаҡ һәм ул бейеп китәсәк. Бейеүҙе уйын эш тип һанаһалар ҙа, башҡорт бейеүе - иң ауыр бейеүҙәрҙең береһе. Данлыҡлы бейеүсе Игорь Моисеев та был турала әйткән. Унда тән, мимика, артислыҡ барыһы ла эшләргә тейеш. Физкультура уҡытыусыһы һөнәрен дә үҙләштергән кеше булараҡ әйтә алам: спорт менән хореографияны сағыштырһаң, икенсеһе күпкә ауырыраҡ. Әйтәйек, мин йүгереп китеп барғанда арып китһәм, тиҙлегемде кәметеп, ял итеп ала алам. Сәхнәлә бейеп йөрөгәндә ни тиклем арыһаң да, темпты, ритмды, линияны тоторға кәрәк, йылмайып, кәрәк урында ҡысҡырып йөрөргә, ҡапыл туҡтап тороп, һикереп, яңынан бейей башларға кәрәк.

Мин юҡҡа ғына башҡорт бейеүе башҡорт балаһын үҙ асылына ҡайтара ала, тип әйтмәйем. Быйыл балалар араһында үткән "Байыҡ" бәйгеһендә 1-се урынға лайыҡ булған уҡыусым ете йәшлек Әҙилә Билалованың баштан уҡ ҡатмарлы хәрәкәттәрҙе ҡабатлай алыуын күҙәтеп йөрөгәйнем. "Байыҡ"ҡа барып, унда башҡа балаларҙы күреп, аралашып ҡайтҡандан һуң ҡыҙыбыҙ бөтөнләй үҙгәрҙе", тип шатлана бөгөн уның атаһы менән әсәһе. Хәҙер башҡортса ғына һөйләшергә тырыша, тиҙәр. Бер көндө мәктәпкә сәсен ике толом итеп үреп килгәнен күреп, берәй ҡайҙа сығыш яһайһыңмы әллә, тип һораһам: "Юҡ, миңә шулай нығыраҡ оҡшай", - тип яуаплай. Ошо тырышлығын ташламаһа, уның еңеүҙәре алдалыр әле, тип иҫәпләйем.

### Ижад - йәшәү мәғәнәһе

Әҙиләгә бәйгегә "Ҡурай яланы" тигән бейеүҙе үҙем һалғайным. Тыуған яҡҡа ҡайтып, тәбиғәт ҡосағына сыҡһаң, шунда уҡ төрлө идеялар килә башлай. Бер йәй атайға бесән сабышҡанда ялан ситендә ҡурайҙар үҫеп ултырыуын күреп, күңелгә һалып ҡуйғайным. Шуны йәйлап үҫтереп, бейеү һалдым. Фонограммаһын Илшат Яхин эшләне. Ни өсөн мин быны айырып әйтәм, республикала йырға фонограммалар яҙыусылар күп булһа ла, бейеүгә фонограмма яҙыусылар 3-4 кеше генә. Үҙенә күрә был да проблема.

Был минең беренсе бейеүем түгел, балалар араһында үткән "Байыҡ" бәйгеһендә "Осҡон" ансамбле "Ҡапҡа урлау"ҙы бейегәне бар. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡарылмаған бейеүҙәрем күп, хәҙер көслө генә ансамбль булдырыу ниәте менән дәртләнеп йөрөйөм. Шунда уларҙы сәхнәгә сығарырға мөмкинлек булыр ине. Яңы идея өҫтөндә эшләү, яңы бейеү һалыу миңә оҡшай, илһамланып йөрөгән мәлдәр эшемә үҙе бер кинәнес өҫтәй.

Балалар ансамблдәре республикала хәҙер күбәйҙе. Бында Рита Ришат ҡыҙы Өмөтбаеваның "Байыҡ" проекты ҙур роль уйнаны. Ни тиклем рәхмәтле булғаныбыҙҙы ул үҙе лә белә. Был бәйгелә ҡатнашыуға бер ниндәй ҡаршылыҡтар юҡ, эшеңде лә күрһәтеп ҡалырға була. Уның һайлап алыу туры ла үҙе бер оҫталыҡ дәресе бит ул. Кемдәр яңы ансамбль төҙөгән, уларға мотлаҡ барып, ошо мөхитте күрергә кәрәк. Балалар башҡорт бейеүенең нимә икәнен күреп, аңлап, үҙҙәре лә ошолай бейергә өйрәнергә теләп, дәртләнеп ҡайтасаҡ. Бейеүҙең техникаһы бер, ул юғары кимәлдә булған хәлдә лә, күңел, рух тигән нәмә етешмәүе ансамблде юҡҡа сығара ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Талантлы бейеүселәр күп, әммә фекерле, уйлана белгән бейеүселәр бармаҡ менән һанарлыҡ. Бейеүсе булып сәхнәлә бейеүгә ҡарағанда, уҡытыусы булып белгәнен балаларға өйрәтергә тырышып йөрөгән Денис Рауил улының уңыштарына ҡыуанырға тағы ла форсат сығыр әле киләсәктә, иншалла. Берәүҙең маҡсаты меңдәрҙең күңелендә ут тоҡандырырға һәләтле, шулай бит? Башҡорт бейеүенең асылын, мәғәнәһен аңлаған, бейеү - милләтебеҙҙең рухи бағанаһының бер таяуы тип фекер йөрөткән замандашыбыҙға был йәһәттән даланлы булыуын теләйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АТАЙ ТӘРБИӘҺЕ

**Атайҙар улдарын үҙҙәре белмәгәндә-һиҙмәгәндә, йоҡлап ятҡанында ғына һөйөргә тейеш, тигән яҙылмаған ҡағиҙә бар.**

Был һүҙҙәрҙе тура мәғәнәһендә лә, кинәйә рәүешендә лә ҡабул итергә кәрәктер ул, тием. Һөйөү, наҙланыу, нәзәкәтләнеү ниндәйҙер кимәлдә кешенең йомшаҡ күңелле булыуын, ихтыярһыҙлығын, ҡатын-ҡыҙҙарға хас нескә хисле булыуын күрһәткән кеүек. Ә кешенең күңеле, ул ирме, ҡыҙ-ҡатынмы, таш түгел, ҡасандыр бер килеп урғылыр, түгелер, яҙылыр һәм ял итер мөҙҙәте етә. Тимәк, "атайҙар улдарын үҙҙәре белмәгәндә-һиҙмәгәндә, йоҡлап ятҡанында ғына һөйөргә тейеш" тигән ҡағиҙә атай булған кешенең бары тик улдары белмәгәндә-һиҙмәгәндә йәки йоҡлаған саҡтарында ғына тик үҙҙәре хаҡында ҡайғыртып, хискә бирелә алыуы хаҡында ла һөйләй бит. Тимәк, атай булған кешенең улдарының күҙе алдында көсһөҙ, баҙнатһыҙ, самаһыҙ хискә бирелеүсән, ихтыярһыҙ булып күренергә, күҙ йәшен күрһәтергә хаҡы юҡ. Был - үҙ миҫалың менән тәрбиәләүҙең иң камил өлгөһөлөр ул. Кем белә, бәлки, чечендарҙың "Улыңа дошман бул, ул үҫеп еткәс, һинең иң яҡын дуҫыңа әүерелер", тигән мәҡәл-әйтеменең бер аңлатмаһы беҙ һүҙ алып барған ҡағиҙәлә лә яталыр.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

**✓ Мәүлет Ямалетдиновтың ҡобайырҙары бығаса ишетелмәгән эстәлектә лә, көйҙә лә булып, башҡаларҙыҡынан айырылып торҙо (конкурстың гран-приһы уға бик тә лайыҡлы бирелде).**



ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМ КӨСЛӨРӘК?

■ Гарвард университетында уҙғарылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, офисты йыш елләтеп тороу хеҙмәткәрҙәрҙең когнитив функцияларына яҡшы йоғонто яһай. Белгестәр 6 көн буйына төрлө шарттарҙа эшләгән 24 кешене тикшергән. Һауа таҙа булған бинала эшләүселәр ҡуйылған бурыстарҙы 61 процентҡа тиҙерәк үтәгән. Әгәр ҙә бүлмәләрҙә һауаны бысратыусы матдәләр генә түгел, углекислы газ кимәле лә түбән икән, һынауҙа ҡатнашыусыларҙың мәғлүмәтте ҡабул итеү һәләте 101 процентҡа күтәрелгән. Әйткәндәй, Кардифф университеты ғалимдары мәғлүмәттәре буйынса, офистағы йәшеллек эшкә һәләтлелекте 15 процентҡа арттыра. Бынан тыш, бүлмә гөлдәре хеҙмәткәрҙәрҙең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай, улар үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя, имеш.

■ Таблетка йәки капсула формаһындағы витаминдар тарихта ғына тороп ҡалмаҫ тимә. Хәҙер В төркөмө витаминдары менән байытылған витамин вейптары барлыҡҡа килә башлаған. Урамда боҫ борҡотоп, нимәләр тартып йөрөүсе ир-егеттәрҙе күргәнегеҙ бармы? Замандың яңы модалы ҡыҙыҡһыныуы - вейп ошо үҙе инде. Әммә табиптар был вейптарҙың ябай биологик актив өҫтәмәләрҙә алыштыра алмауы тураһында иҫкәртә. Етмәһә, уларҙың үпкә яман шешенә килтереүе лә бар икән. Файҙалы матдәләрҙең күбеһе һыуҙа йәки майҙа ирей. Шуға ла улар ашҡаҙан-эсәк трактында һеңеп бөтә. Үпкәләргә улар барып етмәй ҙә тиерлек. Хәҙер витаминдарҙы иң тәүҙә үпкәләр ҡабул итергә тейеш була.

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үсешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон буленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейененең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәрҙә дәүмәл яғынан ул ҙурыраҡ булыу сәбәпле, улар нығыраҡ сирләй. Шуға ла быны аңлап ҡабул итергә кәрәк, ти белгестәр. Ҡатын-ҡыҙ был йәһәттән ир-егеттәрҙән күпкә көслөрәк булып сыға.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ОНОТОЛА ЯҘҒАН ЙОЛАНЫ...

## тергеҙеү юлындабыҙ



УФА 2018 ВСЕРОССИЙСКИЙ ФЕСТИВАЛЬ СКАЗИТЕЛЕЙ (СЭСЭНОВ)

**Республикабыҙ бына икенсе тапҡыр Бөтә Рәсәй сәсәндәр бәйгеһенә Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм Башҡортостандың ҡала-райондарынан ҡобайырсыларҙы йыйҙы. Фестивалдә ҡатнашыусыларҙың башҡарыу оҫталығын жюри ағзалары - Ҡырғыҙ Республикаһы фольклорсыһы, профессор Талантаалы Бакчиев, профессор Иван Карпухин, филология фәндәре докторы Розалия Солтангәрәева, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары Нәфисә Тулыбаева, Үҙәктең фольклор буйынса баш белгесе Гөлгөнә Баймырҙина, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, шағирә Лариса Абдуллина баһаланы.**

Сара "Күк көш" Бөтә Рәсәй конкурсы, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса республика бәйгеләре лауреаты Ләйсән Золотарева сығышы менән асылды. Артабан конкурста ҡатнашыусылар майҙанға сыҡты. Беренсе һүҙ Саха-Якутстандан килгән "Дьолуо" фольклор ансамбленә бирелде. Иң тәүҙә, әлбиттә, уларҙың колориты, ҡараштты арбаған милли кейемдәре иғтибарҙы йәлеп итте. Артабан иһә ансамбль олонхо башҡарыу, көйләү, һамаҡлауы менән арбаны. Тупыҙ кешенең һәр береһе бер стилдә сығыш яһай - береһе оҙон итеп һуҙып йырлап тамамлаһа, икенсеһе еңел һамаҡлау менән элэктереп ала, уны бытырлап ашығып һөйләүсеһе алыштыра ла тағы һамаҡлауға күсә. Уларҙың бер һүҙен дә аңламаһаҡ та, ауыҙҙарҙы асып тыңланыҡ. Хатта арбалдыҡ, тиергә лә була.

Унан ары иғтибарға лайыҡ ҡунағыбыҙ Илья Чуркин булғандыр, моғайын. Урыҫтың иҫке дин вәкилдәре (староверҙар) ғаиләһенән икән был ун туғыҙ йәшлек егет. Ул олатаһынан ишеткән батырҙар тураһындағы риүәйәтте һамаҡлап-йырлап һөйләне. Ҡыҙыҡ ҡына бер күренеш, яңылыҡ булды уның сығышы. Бигерәк тә йәш кешенең әкиәт һөйләгәндәге нурлы йөҙө, алсаҡлығы, ниндәйҙер бер эске йылылығы ла тәьҫир итте шикелле. Шулай уҡ аңлап етмәһәк тә, бик йылы ҡабул иттек.

Артабан сығыш яһаған Мари Эл ҡунағы Валентина Петрова ла конкурсҡа бик үҙенсәлекле әҫәрҙәр алып килгәйне. Борон бер марийҙың ҡабаҡты тәүге тапҡыр күргәне, уны баҙарҙа: "Был аттың йомортҡаһы, баҫып ултырһаң, эсәнән ҡолон сыға", - тип алдағандары һәм марийҙың ҡабаҡты һатып алып ҡайтып, баҫып ултырғаны тураһында күңелле генә бәйәндә һамаҡлап ишеттерҙе беҙгә В.Петрова.

Тағы ла бер ҡунаҡ тураһында ла әйтеп китергә кәрәктер. Дағстан Республикаһынан килгән Айдун Магомедов тау халҡының боронғо йырын башҡарҙы. Әлеге фестиваль шарттарына яуап бирмәһә лә, уның башҡарыуындағы көй үҙ ауаздарына эйәртеп, әллә ҡайҙарға алып киткәндәй тәьҫир итте...

Үҙебеҙҙекеләр араһында ла арбарлыҡ итеп сығыш яһағандар булманы түгел. Мәүлет Ямалетдиновтың ҡобайырҙары бығаса ишетелмәгән эстәлектә лә, көйҙә лә булып, башҡаларҙыҡынан айырылып торҙо (конкурстың гран-приһы уға бик тә лайыҡлы бирелде). Башҡарыусы артыҡ һүҙ-хәрәкәтһеҙ, маҡсатлы рәүештә генә сығыш яһаны һәм тыңлаусыларҙа ла тик йылы тойғолар ғына ҡалдырҙы. Юғиһә, бәйге барышында кәрәкмәгән, талаптарға ярашлы булмаған әҫәрҙәр менән сығыш яһап аптыратыусылар ҙа байтаҡ булды. Уларға бәйге шарттары аңлатылмаған микән ни, ни өсөн сәсәндәр фестивален шиғыр конкурсына әйләндерәләр әле, тиған борсоулы һорау бәйге буйына тынғы бирмәне...

Бөрйән районынан килгән Гөлдәр Әхтәмова ла бығаса сәхнәнән ишетелмәгән әҫәрҙе һөйләп-һамаҡлап, башҡарыу оҫталығы менән дә айырылып торҙо. "Уҙаҡ менән Туҙаҡ - балабәшнәк ярсығы" эпосын ишеттерҙе ул.



Сибайҙар.

Башта саҡ ҡына ҡаушаһа ла, тора-бара асылып, образға инеп китте ҡобайырсы һәм тыңлаусыларҙы ла эпос эсенә әйҙәне. Ысынлап та оҫта башҡарыу. Теле лә шыма, шундай оло әҫәрҙе ятлап алған, һамаҡлар ерен һамаҡлап, йырлар ерен йырлап, кәрәк ерҙәрен сутырлатып ятлап үтеп китте. "Афарин!" тиеүҙән башҡа һүҙ юҡ ине был ханымға.

Сибай ҡалаһының сәсәндәр мәктәбен дә айырып әйтеп китергә кәрәк. Был мәктәптән дә (етәксеһе - Асия Ғәйнуллина) тап кәрәкле һәм тейешле кимәлдә әҙерләнеп килгәйнеләр. "Аҡһаҡ ҡола"ның төрлө варианттарын төрлө бирелештәрҙә башҡарҙы улар. Оҙонға һуҙылып китһә лә, был сығыш тап әлеге фестиваль шарттарына ярашлы ине һәм ошо бәйге майҙанындағы иң матур әҫәрҙәрҙең береһе булды.

Фестивалдә ҡатнашҡан илленән ашыу бәйгесе сығышынан, мин, тамашасы булараҡ, бына ошоларҙы ғына телгә алып үтә алам. Үкенескә ҡаршы, башҡа башҡарыусыларҙа башҡорт халыҡ эпосын йәки ҡобайырын башҡарыу тәртибен дә, үҙенсәлеген дә, һәләтен дә аңғара алманым. "Урал батыр" эпосын шиғыр итеп уҡыу йәки тасуири ятлай белеү сәсәнлек икәндер, тип уйламайым. Йә булмаһа, эпосты танымаҫлыҡ итеп театрлаштырып күрһәтеү ҙә эле сәсәнлек түгел. Башҡалар ниндәй фекерҙәлер?..

Күптәр үҙҙәре ижад иткән әҫәр менән килгән. Сәхнәгә сығып баҫҡас ҡына уның алып килгән материалы бәйге талаптарына тап килмәүе асыҡлана. Ошондай мәлдәрҙә, әллә фестивалде ойоштороусылар менән бәйгеселәр араһында бығаса бер бәйләнеш тә булмаған микән, тип уйларға мәжбүр булаһың. Аңлауымса, Рәсәй кимәлендәге сәсәндәр бәйгеһендә иң мәртәбәле башҡарыусылар һайланырға тейеш ине. Асылда, араларынан сама менән башҡара белеүселәрҙе генә һайлап алырға тура килде.

Нисек булғанда ла, был сараның республикабыҙҙа үткәрелеп килеүе, халыҡ араһынан ауыҙ-тел ижадының ошо өлгөһөн өйрәнеүселәрҙең сүпләп эҙләп табылыуы, уларға башҡа халыҡ вәкилдәренең оҫталары менән аралашып-күрешеп ҡалыу форсаты бирелеүе, сығыштарҙы тамашасыларға күрһәтеүҙәре, сәсәндәр ижадын пропа-

✓ *Кемгәлер асыуың килеп, ҡысҡырыр, насар һүҙҙәр әйтер хәлгә барып еттең, ти. Шул ваҡытта үҙеңде ҡулға ала алмаһаң, йүгереп барып көҙгөгә ҡара. Үҙеңдең бүртенгән йөҙөң, аларған күҙеңде күреп, асыуыңды онотоорһоң.*



гандалауҙары һәм башҡа бихисап ыңғай күренештәре оло маҡтауға лайыҡ. Тимәк, беҙҙә быға битараф түгелдәр. Бәлки, ниндәйҙер ситләшеүҙәр, яһалмалаштырыуҙар ҙа барҙыр, әммә былар инде ғәйеп түгел. Оло йорт буралғанда таптары осмай тормай, тигәндәй, бындай мәртәбәле хеҙмәттә лә ҡытыршылыҡтар булыуы тәбиғи. Ләкин әлеге кәмселектәр киләсәктәге һөҙөмтәләрҙе яҡшыртыуға этәргес булһын ине. Киләсәктә, Алла бирһә, әлеге башланғысты: "Беҙҙең ата-балаларыбыҙ ҡалай ҙа аҡыллы булғандар, ниндәйен ҡомартҡыларҙы тапшырып ҡалдырғандар беҙгә", - тип яҙасаҡтарына иманым камил.

**Теманы бәйгелә ҡатнашыусылар фекере менән тамамлап ҡуяйыҡ.**

***Чуркин Илья, Коми Республикаһы:*** Мин олатайымдан ишеткән, ятлап алған былиналарҙы һөйләнем. Олатайым ағас эштәре оҫтаһы булды. Ҡалаҡтар, саналар эшләй ине. Ҡыш көндәре өйҙә шул эштәре менән була һәм беҙҙе, балаларҙы, теҙеп ултырта ла, ошо былиналарҙы һөйләй. Иғтибарым ситкә киткәндә, "Малыш, слушай!" тип ҡаратып ала торғайны. Үҙемде белә-белгәндән шул былиналарҙы, әкиәттәрҙе тыңлап үҫтем. Мәктәптә уҡығанда ла, поход-маҙарға сыҡһаҡ, төндәр буйы алмашлап былина һөйләйбеҙ. Ниндәйҙер әҫәрҙе яттан белмәгән йәштәшем юҡ ине. Ололар ғаиләләге бер балаға үҙе белгәндәрҙе ятлата беҙҙә. Һөйләүгә барыһына ла һөйләй, әммә берәүҙе тәрбиәгә ныҡлап ала. Мин олатайым өсөн шундай бала булдым. Әлеге 19 йәшемдә өс көн рәттән туҡталмайса былина һөйләй алам. Бурысым - белгәндәремде үҙемдең быуындарыма тапшырып ҡалдырыу.

***Айдун Магомедов, Дағстан Республикаһы:*** Мин Дағстан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Фестивалгә "лезгичино" тип аталған лезгин-ошуг йырҙарын алып килдем. Был боронғо йырҙар циклында тауҙар иле, тауҙар тәбиғәте һәм уларҙа көн иткән ғорур халыҡтар тураһында һөйләнә. Беҙҙә бындай йырҙарҙы, ғәҙәттә, йола байрамдарында, ҡунаҡтарҙа, туйҙарҙа башҡаралар. Ғаилә ағзалары йыйылған мәжлестә ниндәйҙер боронғо әҫәр башҡарылмай икән, был йола тотмау булып иҫәпләнә. Тимәк, был ғаилә ата-балаларын, үткәндәрен, йолаларын ихтирам итмәй булып сыға. Бер ғаиләнең дә бындай түбәнселеккә төшкөһө килмәй һәм ошондай көйләп һөйләнә торған тарихтарҙы быуындан-быуынға өйрәтеп ҡалдыра киләбеҙ. Миңә күп йырҙарҙы үҫмер сағымда уҡ ғаиләмдәге ололар өйрәткәйне, йәшәй бара үҙем боронғо әҫәрҙәрҙе йыйыуға, яҙҙырыуға күнектем. Бөгөн репертуарымда ике йөҙҙән ашыу ошондай көйлө тарих бар.

***Розалия Докторова, "Дьолуо" фольклор ансамбле ағзаһы, Яҡут Республикаһы:*** Ун йыл тирәһе әүәл беҙ, олонхо һөйләү менән ҡыҙыҡһынған кешеләр, ауылыбыҙҙа тупланып киткәйнек. Был махсус мәктәп тә, сәнғәт ойошмаһы ла түгел. Борондан ата-бабаларҙан ишетеп белгән, кемдәргәлер тығандарынан күскән ошо олонхой өлөштәрен, китаптарҙан алып өйрәнелгән тулы формаларын бер теҙемгә һалып өйрәндек. Башта ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлау һәм өйрәнеү маҡсатында ғына башлаһаҡ, тора-бара быны әлегеләй киңлектәге сараларға ла йөрөүгә күстек.

Беҙгә үткән быуаттан ғына ла 300-ләп олонхосыбыҙ булыуы билдәле, күптәренең яҙмалары ла һаҡланған. Әле беҙ башҡарған әҫәр утыҙлап йыйма өлөштәрҙән тулыландырып ҡойолған олонхо ул. Борон был ижадты өс көн, өс төн башҡарған булһалар, бөгөн мин, мәҫәлән, сәғәт ярымдан ашыу һөйләй алмайым. Атайымдың быуыны олонхосылар булған. Ул үҙе лә трансҡа инеп, онотолоп, оҙайлы ваҡыт һөйләй торғайны. Үкенескә ҡаршы, бөгөн беҙ ул оҫталыҡтан мәхрүм, әммә шул ҡомартҡыларҙы ҡурсалап, йыйнап, йәштәргә өйрәтеп ҡалдырырға бурыслы.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Дөрөҫ әсенә Розалия ханым, беҙ ҙә бөгөн ул оҫталыҡты, ысын сәсәнлек мәктәбен юғалтҡанбыҙ. Совет осоронда халыҡ ижадын иҫкелек билдәһе итеп онотторou, эпостарҙы әкиәткә әйләндереү, боронғо әҫәрҙәр менән таныш булған шәхестәребеҙҙең репрессияларҙа юҡ ителеүе кеүек ябай бер нисә сәбәп кенә лә бының аңлатмаһы булып тора ала. Шулай уҡ "Урал батыр" кеүек йәндәр һәм космос кимәлендәге юғары аң әҫәрен оҙайлы йылдар мәмерйәләге тәүтормош кешеләре көнкүрешен һүрәтләү кимәленә төшөрөп ташлау ҙа ғалимдарыбыҙҙың хатаһы булды. Үкенескә ҡаршы, был бөгөн дә шулай дауам итә. Бәлки, беҙгә эпостарыбыҙҙы әкиәт итеп уйнауҙан туҡтап, уның фәлсәфәһен төшөнә башларға ваҡыттыр? Шуны аңлағанда, бәлки, ысын сәсәндәребеҙ ҙә барлыҡҡа киләр...**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

*СӘЙЕР ДОНЪЯ*

# ЙӨҘӨМДӨ ОНОТҠАНМЫН...

**Бала саҡтағы һымаҡ, башты мендәргә терәү менән мышнап ҡына йоҡлап китһәң икән ул. Юҡ шул, ни тиклем йоҡоң килеп, арып-талып тигәндәй килеп ятаһың, инде тәмле йоҡоға сумам, тип, күҙҙәреңде йомоп, бер аҙ ятыуға, әкрен генә шылышып, ниндәйҙер бер уй башҡа килеп инә. Сыҡмай ҙа ҡуя бит. Ҡыуып та ҡарайһың - юҡ, китмәй, етмәһә, уға ялғанып, икенсеһе, өсөнсөһө килеп тула. Уларҙан ҡотолорға маташҡан арала йоҡо тигән нәмә лә сығып оса. Шунан ятаһың инде йоҡондоң килерен көтөп. Уйланмаған уй ҡалмай, әрләшмәгән кеше ҡалмай, барыһын да тикшереп сығаһың.**

Бер мәл сират үҙемә етте. Бәй, үҙемде күҙ алдына килтерәйем, тиһәм, булмай бит малай. Йөҙөмдө онотҡанмын. Иҫкә төшмәй ҙә ҡуя. Иртәнсәк көҙгөгә лә ҡарағайным буғай. Көҙгөләге сағылышты иҫләргә тырышам. Килеп сыҡмай. Ә бына башҡаларҙың йөҙө, кемде генә уйлаһам да - күҙ алдымда. Бына ирем - битендәге һәр бер һырын һанап бирә алам. Улым тора ҡарап. Бына уның шатлыҡлы йөҙө, бына һағышлы мәле. Бына ҡыҙым, кейәүем, ейәнсәрем, туғандарым... Бөтәһенең дә йөҙөн ап-асыҡ итеп күрәм. Бына әхирәттәрем, күршеләрем, хатта бала саҡта бергә уйнап үҫкән дуҫтарым, класташтарым... Ә мин - юҡ.

Уйлай торғас, башҡа барып етте: һуң мин бит ошо һанап үткән кешеләрҙе көн дә күрәм, йәки күргәнмен. Үҙемде иһә мин бөтөнләй күрмәйем. Эйе, кешегә күҙ башҡаларҙы күрер өсөн бирелгән. Шуға күрә ул гел бүтәндәрҙе тикшерә, етешһеҙлектәрен күрә, тәнҡитләй, маҡтай. Ә үҙен күрмәй, күрмәгәс, үҙе тураһында белмәй. "Кеше күҙендәге сүпте күрә, үҙендәге бүрәнәне күрмәй", тип халыҡ та юҡҡа әйтмәгән бит. Минең өләсәйем: "Әҙәм балаһы үҙен-үҙе ситтән ҡарап торһа, аҡылдан яҙыр ине. Аллаһы Тәғәлә шулай эшләгән инде - бәндә үҙен, үҙенең ерҙә ни ҡыланғанын әхирәткә барғас ҡына күрә", - ти торғайны.

Минеңсә, кеше үҙен күрмәй генә түгел, ғөмүмән, үҙен белмәй. Әҙәм заты өсөн иң таныш түгел кеше - ул үҙе. Шуға күрә, һәр кемгә үҙен телевизор йә видеонан ҡарауы ҡыҙыҡ. Ә бына мәңгелек донъяға күскәс, ул ысынлап та үҙен (ерҙәге тормошон) ситтән күрә икән. Һәм ул үҙенең ғәйебен, гонаһтарын тулыһынса таный, бер нисек тә бәхәсләшә алмай, бөтәһе менән дә килешә икән. Ҡыҙғаныс, был тормошта уҡ күрһәтһендәр ине ул быны. Хәйер, кәрәкмәй, йә өләсәйем әйткәндәр хаҡ булып, кешеләр аҡылдан яҙа башлар... Былай ҙа бар донъя аҡылын юйғандай шашына...

Ләкин ҡайғырмай торайыҡ. Аллаһу Тәғәлә әҙәм балаһына күренмәй торған күҙҙәр ҙә биргән бит әле: аҡыл күҙе, күңел күҙе, ҡәлеб күҙе. Тик беҙ уларҙы файҙаланырға ғына онотабыҙ йыш ҡына. Ә бит улар маңғай күҙенән күпкә көслөрәк. Аҡыл күҙе менән һин үҙеңде туҡтауһыҙ күҙәтә, контролдә тота алаһың: телеңде ғәйбәттән тыя, хис-теләктәреңде, йәғни нәфсеңде йүгәнләй, уйҙарыңды, хатта атлап йөрөшөңдө үҙгәртә алаһың. Бөтәһе лә ябай, ләкин бының өсөн ихтыяр көсө кәрәк. Суфыйҙар (ысын суфыйҙар) тәүлегенә 24 сәғәт үҙҙәрен күҙәтеү аҫтында тота ала икән. Улар шул юл менән ҡәлебтәренең таҙалығын һаҡлай, унда Аллаһтан башҡа бер ниҙе лә индермәй. Уларҙың ҡәлебе (йөрәге, күңеле) асыҡ һәм ул Аллаһ менән тоташҡан. Ул һәр саҡ, Аллаһ, тип тибә...

